БЕҘ – БЕРГӘ! ....................4-5

## Ярҙам төрҙәре өҫтәлеп тора

МХО-ла ҡатнашыусылар ғаиләләре өсөн тыныс



ИЛЬӨЙӘРЛЕК ....................17

## Байрам



Хикәйә

ТОРМОШ ҺАБАКТАРЫ....18

## Ғүмерлек үкенес

“Һин үлгәс кенә кәләш алам, инәй”





ПРОГРАММАҺЫ 21-22



# Башҡортостан

Гәзитте ойоштороусылар – Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте
BASHGAZET.RU

1917 йылдың 14 июненән сыға

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ һәМ МӘҘӘНИ ГӘЗИТЕ

12+

№ 83 (28085)

2023 йыл, 27 октябрь, ЙОМА


МАТБУҒАТ Әммә гәзит-журналдарҙың ваҡытында килмәүе күңелде ҡыра

# Халыҡ милли баҫмаларҙы уҡырға теләй




Кәримә Усманова фотоһы.

“Башҡортостан” гәзите хеҙмәткәрҙәре Сибай ҡалаһының Р. Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы китапханаһында директор Д.У. Фәтҡуллина (һулдан беренсе) һәм китапханасы М.Ә. Вәлиева менән.

✍ Гөлдәр ЯҠШЫҒОЛОВА

**Ошо көндәрҙә “Башҡортостан” гәзите журналистары Әбйәлил, Баймаҡ райондарында, Сибай ҡалаһында ижади сәфәрҙә булып ҡайтты. Милли баҫманың баш мөхәррире, Башҡортостан Республикаһының Журналистар союзы рәйесе Вәдүт Исхаҡов, баш мөхәррир урынбаҫары Алһыу Әһлиуллина, баш мөхәррир ҡарамағындағы махсус хәбәрсе Илдар Аҡъюлов, мәғариф бүлеге мөдире Гөлдәр Яҡшығолованан торған төркөм ошо төбәктәге гәзит уҡыусылар менән ойошторолған осрашыуҙарҙа ҡатнашты, халыҡ менән күҙгә-күҙ ҡарап һөйләште. Урында беҙгә Урал арьяғы буйынса үҙ хәбәрсебеҙ Кәримә Усманова ла ҡушылды, тап ул йылы, йәнле саралларҙың ойоштороусыһы булып сығыш яһаны.**

→ 12-13

## ТОРМОШ ҺУЛЫШЫ



### Яндекс Карта – башҡорт телендә!

200-гә яҡын навигация фразаһы әҙер

Билдәле телетапшырыуҙар алып барыусыһы Флүрә Мурзина Өфө водителдәре өсөн “Яндекс Карта” ҡушымтаһында тауыш күрһәтмәләрен яҙыуҙа ҡатнашҡан. Һөҙөмтәлә башҡорт телендә 200-гә яҡын навигация фразаһы яҙып алынған. Өфө буйлап маршрут һалыу өсөн ҡушымтала профиль булдырырға, көйләүҙәргә инергә, «Тауыштар һәм иҫкәртеүҙәр» бүлегенә баҫырға, унан «аннотация теле»н асырға һәм башҡорт телен һайларға кәрәк.

# Башҡортостан был тәңгәлдә лә алдынғы

✍ Илдар АҠЪЮЛОВ

**Республикабыҙҙа төрлө йүнәлештә мөһим саралар йыш уҙғарыла. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының Колонналар залында, тап уҡыусы балаларҙың көҙгө каникулы алдынан, полилингваль белем биреү буйынса халыҡ-ара форумды асыу тантанаһының үтеүе – шуға асыҡ миҫал.**

Сара башланыуға ярты сәғәт тирәһе ваҡыт бар, ысынлап та, алдан килгәндәр. Бер урында мөғәллимдәр күп йыйылған, моғайын да, мәғариф тармағындағы яңылыҡтар тураһында әңгәмә алып баралар ҙыр. Уң яҡта иһә таныш бер нисә гимназия директорын осраттым, улар полилингваль белем биреү йүнәлешендә ҡыҙыу фекер алыша ине. Ғөмүмән, педагогтарҙың һөйләшер һүҙҙәре күп йыйылған.

Башҡортостан мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлетбирҙин билдәләүенсә, республикабыҙҙа полилингваль белем усаҡтары бурыстарына яуаплы ҡарай, ғөмүмән, был тәңгәлдә белем биреү бик яҡшы ойошторолған. Илдар Марат улы педагогтарға эштәрендә уңыштар теләне, балаларға төплө белем һәм күркәм тәрбиә биргәндәре өсөн рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. Әйткәндәй, Башҡортостан полилингваль белем биреү йәһәтенән илебеҙҙә алдынғыларҙан иҫәпләнә. Аҙаҡтан министр юғары күрһәткестәргә өлгәшкән уҡытыусыларҙы бүләкләне, сара йырмоң һәм бейеү менән аралашып барҙы.

Артабан форумда ҡатнашыусылар өсөн баш ҡалабыҙҙың юғары уҡыу йорттарына, мәктәп һәм гимназияларға сәфәр ойошторолдо. Мәҫәлән, уҡытыусыларҙы Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында, Өфө фән һәм технологиялар университетында студенттар көтә ине. Ҡунаҡтар юғары уҡыу йорттарында уларҙың эш йүнәлеше менән дә таныштылар.

Шулай уҡ Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернатында, 1-се республика полилингваль күп профилле гимназияһында, “Смарт” 2-се республика полилингваль күп профилле гимназияһында, 202-се полилингваль балалар баҡсаһында һәм башҡа белем усаҡтарында булдылар, уҡыусы балалар менән осраштылар, дәрестәр ҡаранылар.

Бәләбәй башҡорт гимназия-интернаты директоры Дилбәр Фәтхетдинова белдереүенсә, бындай осрашыуҙар, бигерәк тә полилингваль уҡытыу йүнәлешендә, ныҡ кәрәк. Форумдарҙа туплаған тәжрибә киләсәккә маҡсаттар билдәләү өсөн файҙалы. Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы директоры Дилә Фәтҡуллина баланың күп тел белеүе һәр йәһәттән дә үҫешкә бер аҙым икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

# “Легпром” күргәҙмәһе ишектәрен асты



Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.

**Максим Протасов менән Радий Хәбиров хәрбиҙәр өсөн тегелгән кейемде иғтибар менән ҡарап сыҡты.**

✍ Лилиә НУРЕТДИНОВА

**Сара 80-дән ашыу компанияны, билдәле дизайнер һәм етештереүселәрҙе бер майҙанға туплаған.**

Өфөлә IV “Легпром” еңел сәнәғәт форумы үтте. Быйыл сарала Рәсәй, Белоруссия, Үзбәкстан һәм Ҡаҙағстандан 80-дән ашыу компания һәм дизайнерҙар ҡатнашты.

Форум бер нисә тематик йүнәлешкә бүленде, күргәҙмә майҙанына дизайн, старт, фабрика, мода, бала саҡ, спорт, эш кейеме һәм сифат территориялары инде.

“Республикала “Легпром” форумын дүртенсе тапҡыр үткәрәбеҙ. Йылдан-йыл унда ҡатнашыусылар һаны арта бара. Быйыл Белоруссия, Үзбәкстан, Ҡаҙағстандан килгән ҡунаҡтарыбыҙҙы, Рәсәй төбәктәре вәкилдәрен сәләмләйбеҙ. Дағстандың тауарҙары күргәҙмәһе ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Рәсәй Федерацияһында һәм күршеләребеҙҙә еңел сәнәғәттең нисек үҫешеүен күреү мөмкинлеге булыр тип уйлайым.

Тәжрибә уртаҡлашыу майҙансығына әйләнгән форум һөҙөмтәле үтһен. Башҡортостан авиадвигателдәр, вертолеттар, нефть, нефть химияһы, газ химияһы ғына түгел. Башҡортостан еңел сәнәғәте менән билдәле булыуын теләйбеҙ”, — тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров форумды асыу тантанаһында.

“Рәсәй сифат системаһы” автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошмаһы етәксеһе Максим Протасов пленумда еңел сәнәғәт үҫешенең төбәк сәйәсәтенең һөҙөмтәлелеген юғары баһаланы.

“Беҙ республиканың ярҙам саралары реаль һөҙөмтәләр биреүен күрәбеҙ. Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәре лә был уңышлы тәжрибәне ҡабатларға тейеш тип уйлайым”, — тине Максим Протасов.

Ул шулай уҡ “Роскачество”ның еңел сәнәғәт предприятиелары менән үҙ-ара эш итеү өсөн ҡулланған ҡоралдары тураһында ентекле һөйләне. Ойошма нигеҙендә продукцияны тикшереү һәм һынау үткәрелә, һөҙөмтәләр буйынса дәүләт сифаты билдәһе сығарыла. Был продукцияны төрлө баҙарҙа, шул иҫәптән һанлы баҙарҙа ла уңышлы таратырға мөмкинлек бирә.

Роскачество етәксеһе Максим Протасов менән бергә республика Башлығы Радий Хәбиров күргәҙмәне ҡарап сыҡты.

“Аркада” сәнәғәт берекмәһенә нигеҙ һалыусы, “Эшселәр кейеме заводы” компаниялар төркөмө етәксеһе Михаил Цукерман төбәк башлығына ағымдағы йылдың һигеҙ айында тейәлгән продукция күләме 4,4 миллиард һум тәшкил итеүе хаҡында һөйләне.

“Республиканың өс тегеү фабрикаһында беҙ яңы технологияларҙы әүҙем индерәбеҙ, кадрҙар йәлеп итеү өҫтөндә эшләйбеҙ, төбәк властарына ҡорамалдар, сеймал һәм материалдар һатып алыуға бүленгән субсидия рәүешендәге ярҙамдары өсөн рәхмәт белдерәм”, — тине Михаил Цукерман.

Радий Хәбиров һәм Максим Протасов Махсус хәрби операцияла һәм хоҡуҡ һаҡлау органдарында хеҙмәт итеүселәр өсөн кейем тегеү менән шөғөлләнгән “Магеллан” компаниялар төркөмө продукцияһы менән танышты.

Төбәк башлығы компания етәкселәренә беҙҙең яугирҙәргә юғары сифатлы кейем тегеп биргәндәре өсөн рәхмәт белдерҙе.

“Беҙҙең ирекле батальон һалдаттары һеҙҙең команда теккән әйберҙәрҙе кейә. Күп кенә еңел сәнәғәт предприятиелары махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн продукция тегеүгә ҡушылды, бының өсөн уларҙың барыһына ла айырым рәхмәт”, — тине төбәк башлығы.

Компания директоры Игорь Шальнов әйтеүенсә, улар яңы туҡымалар ҡуллана башлаған һәм хәҙер хәрби комплект һуғышсылар өсөн тағы ла уңайлыраҡ буласаҡ.

Республика Башлығы шулай уҡ Нефтекаманың “Искож” компанияһы етәкселеге менән аралашты.

“Еңел сәнәғәткә һәм башҡа сараларға булышлыҡ итеү буйынса республика программаһы ярҙамында тегеү ҡорамалдары, сеймал һәм материалдар һатып алыуға 61 миллиондан ашыу субсидия алдыҡ. Беҙҙең тармаҡҡа иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт. Бөгөнгө көнгә “Искож” 1500-ҙән ашыу төр продукция етештерә, быйыл беҙ 1,5 миллиард һумлыҡ продукция оҙаттыҡ”, — тине предприятиеның генераль директоры Лиана Киршина.

2023 йылдың майында Ишембай районында Алға махсус иҡтисади зона территорияһында эшләй башлаған ZA-SPORT спорт кейеме фабрикаһы вәкилдәре билдәләүенсә, предприятие проектлау ҡеүәттәренең яртыһына етә башлаған, тегенселәрҙе йыйыу дауам итә.

Шулай уҡ “Баш-Деним” — ”Лигас” маркалы кейем етештереүсе “Баш-Деним” предприятиеһы ла әүҙем үҫешә. Улар “РусАрм” компанияһы менән берлектә пуля үткәрмәй торған жилеттар һәм хәрби формалар етештерә башлай.

ХАЛЫҠ-АРА ФОРУМ



**Ололар сәйәхәт итә**

Белоруссияның иҫтәлекле урындарын күрәләр

Быйыл апрелдән “Башҡортостан – Белоруссия оҙон ғүмерлелеге. Туризм”. программаһы тормошҡа ашырыла. Әлегә был йүнәлештә 1 меңдән ашыу кешегә экскурсиялар ойошторолған. Программала 55 йәштән өлкәндәр йылына бер тапҡыр ҡатнаша ала.

# Этнотуризм үҫешһен өсөн

## Республикабыҙҙы донъяға күрһәтергә тырышабыҙ

✍ Резеда ШӘҢГӘРӘЕВА

**Баш ҡалабыҙҙа этнотуризм буйынса III халыҡ-ара форум уҙғарылды, шулай уҡ уның нигеҙендә Бөтә Рәсәй “Йыл маршруты-2023” турист премияһының финалы ла үтте. Был сара Рәсәйҙең 67 төбәгенән 500-ҙән ашыу экспертты йыйҙы. Унда Белоруссия һәм Абхазиянан да вәкилдәр ҡатнашты.**



Автор фотоһы.

Рәлиф Ситдиҡовтың күргәҙмәһе ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

### Уңайлы ваҡытта йәшәйбеҙ

Өфөнөң “Торатау” конгресс-холында этнотуризм буйынса форумды асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та ҡатнашты. Ҡунаҡтарҙы тәбриклəп, Башҡортостан етәксеһе бөгөнгө шарттарҙа форумдың әһәмиәтен билдәләне.

– Этнотуризмға ҙур иғтибар бирәбеҙ. Республикабыҙ үҙенсәлекле, бында бик күп халыҡ тыныс һәм татыу йәшәй. Улар үҙҙәренең тарихын, мәҙәниәтен, йолаларын һаҡлай, – тине Радий Хәбиров. – Бөгөнгө форумды өсөнсө тапҡыр уҙғарабыҙ һәм ул, тәжрибә уртаҡлашыу, туризмдың үҫеш перспективаларын тикшереү өсөн ҡыҙыҡлы майҙансыҡ булараҡ, үҙенең әһәмиәтен иҫбатланы.

Төбәк етәксеһе этнотуризмдың үҫеш үҙәгенә әүерелгән бер нисә яңы тематик проектты билдәләне.

– Бөрйән районындағы “Шүлгәнташ” музей комплексы – Башҡортостанға тартып торған урын. Шишмә районында Турахан һәм Хөсәйенбәк мавзолейы ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, унда беҙ Евразияның күсмә цивилизациялар музейын булдырабыҙ. “Янғантау” геопаркы Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһендә беренсе булып ЮНЕСКО геопаркы статусын алды. Дөйөм алғанда, беҙ республикабыҙҙы Рәсәй һәм донъя өсөн асырға, үҙебеҙҙең уникаль тәбиғи һәм тарихи объекттарҙы күрһәтергә тырышабыҙ, – тине ул.

Шулай уҡ ул хәҙерге заман турист инфраструктураһын булдырыу йүнәлешенә лә туҡталды. Был өлкәгә Рәсәй Хөкүмәте лә ҙур ярҙам күрһәтә. Ҡунаҡтарҙы урынлаштырыу өсөн урындарҙы арттырыуға 900 миллион һумға яҡын аҡса бүленгән, сөнки уларға бөгөн айырыуса һорау ҙур. Һүҙ глэмпинг, ял базалары һәм башҡа майҙансыҡтар тураһында бара. Федераль ярҙам нигеҙендә 2023 – 2024 йылдарҙа тағы ла ҙурыраҡ эштәр башҡарыу маҡсаты ҡуйылған.

– Беҙ туризм тармағы үҫеше өсөн уңайлы ваҡытта йәшәйбеҙ. Рәсәй халҡы өсөн ҡайһы бер сит ил йүнәлештәре ябылған ваҡытта беҙҙең биләмәләге тәбиғәтте һәм матурлыҡты асыуҙың уникаль мөмкинлеге бар, – тине республика етәксеһе.

Region PR йәмәғәт элемтәһе үҫеше фонды идараһы рәйесе, Бөтә Рәсәй “Йыл маршруты” турист премияһына нигеҙ һалған Геннадий Шаталов Башҡортостан етәксеһенә форумды ойоштороған өсөн рәхмәт белдерҙе. Шулай уҡ ул форумда Бөтә Рәсәй “Йыл маршруты” турист премияһын алыуға конкурстың финалы уҙғарылыуын да билдәләне. Быйыл унда илебеҙҙең 56 төбәгенән 270 тармаҡ проекты ҡатнашҡан, шул иҫәптән 48 ғариза – Башҡортостандан.

– Туризм тармағын нығытыу өсөн республика етди аҙымдар яһай, – тине Геннадий Шаталов. – 2024 йылдың апрелендә союздаш дәүләт сиктәрендә тәүге тематик форум уҙғарырға ниәтләнәбеҙ. Уның майҙансығында “Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге” программаһы менән Башҡортостандың исем туйын уҙғарырға ниәтләйбеҙ. Һеҙҙең республика тәжрибәһе күп төбәктәр өсөн ҡыҙыҡлы, һеҙҙән өйрәнәһе яңылыҡ бар. Республика брендтары – башҡорт балы һәм башҡорт атын танытыуығыҙ өсөн айырыуса рәхмәт, – тине ул.

Форум асылғандан һуң республика Башлығы халыҡ-художество кәсептәре күргәҙмәһен ҡараны, “Урал” турист-рекреацион тибындағы буласаҡ махсус иҡтисади зонаның проекты менән танышты. Ул Бөрйән, Белорет, Әбйәлил райондары биләмәһендә урынлашасаҡ. Шүлгәнташ мәмерйәһе, “Шүлгәнташ” музей комплексы, Башҡорт дәүләт заповеднигы, Ирәмәл тауы, Ирәкташ, Әбйәлил һәм Белорет районының тау саңғыһы курорттары, солоҡтары махсус иҡтисади зонаның төп турист объекттары буласаҡ.

Форумда республика етәксеһе Рәсәй төбәктәренең, Беларусь һәм Абхазияның турист индустрияһы вәкилдәре менән осрашты. Сарала ҡатнашыусылар туризмды үҫтерeүҙә Башҡортостан тәжрибәһен юғары баһаланы.

### Барыһын да эшләйәсәкбеҙ

Артабан “Этнотуризм – турист биләмәләренең үҫеш драйверы” тигән темаға пленар ултырыш уҙғарылды. Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры урынбаҫары Азамат Ғәлин туризм үҫешенә ҡыҫҡаса байҡау яһаны.

– Башҡортостанда беҙҙең төбәгебеҙгә тартып торған урындар байтаҡ. Шүлгәнташ мәмерйәһен барып күреү тәрән тәьҫораттар ҡалдырыр. Былтыр унда “Шүлгәнташ” тарихи-музей комплексын астыҡ. Яңы технологиялар ярҙамында унда кешелек цивилизацияһының барлыҡ тарихын күрергә мөмкин. Донъя кимәлендәге был комплекста 60 мең кеше булып өлгөрҙө. Әлеге көндә Евразияның күсмә цивилизациялар музейын төҙөү эшен башланыҡ. Ул халҡыбыҙҙың тарихын асыуға булышлыҡ итәсәк. Музейҙың төп объекттары – Хөсәйенбәк һәм Турахандың таш мавзолейҙары. Бында башҡорт аты үҙәген, ҡунаҡханалар, һөнәрселек производствоһы, мәҙәни һәм спорт саралары өсөн майҙансыҡтар асырға ниәтләнәләр. Һәр кем ялын ҡыҙыҡлы уҙғарһын өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ, – тине Азамат Ғәлин сығышында.

Ултырышта Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан һәм башҡа ҡалаларҙан килгән ҡунаҡтар ҙа сарала ҡатнашыусыларға ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерҙе. Һәр ҡайһыһы үҙенең ошо тармаҡта алып барған тәжрибәһе менән уртаҡлашты.

Көндөң икенсе яртыһы ла йөкмәткеле һөйләшеүҙәргә ҡоролдо. “Этномәҙәнитуризм: маркетинг үҫеше һәм тәьҫораттар иҡтисады” тигән темаға арналған түңәрәк өҫтәлдә залдан һорау биреүселәр ҙә күп булды. Түңәрәк өҫтәлде Бөтә Рәсәй “Йыл маршруты” турист премияһына нигеҙ һалған Геннадий Шаталов алып барҙы.

Форумда Саха (Яҡут) Республикаһынан килгән “Орто-Дойду” экопаркы отеле хужалары Марианна һәм Петр Андреевтар менән танышыу форсаты тейҙе. Йыраҡтан килгән ҡунаҡтар Башҡортостанда беренсе тапҡыр.

– Башҡорт аш-һыуы менән таныштыҡ. Йылҡы итенән ризыҡтар күп булыуына иғтибар иттек. Беҙҙә лә йәш йылҡы итен яраталар. Форумдан да матур тәьҫораттар алдыҡ. Ойоштороу кимәле бик юғары, күргәҙмәләр бай. “Торатау” конгресс-холы үҙе генә лә матур тәьҫораттар ҡалдырҙы. Башҡортостанда бик күп шифаханалар барлығы ла минең өсөн яңылыҡ булды. Бөтә Рәсәй “Йыл маршруты” конкурсының финалы тап ошо форумда уҙғарылыуы отошло, тип уйлайым, сөнки бында этнотуризм буйынса күп һорауҙар тикшерелә. Былар беҙҙең төбәк өсөн дә ҡыҙыҡлы, – тип һөйләне Марианна Матвеевна.

Әйткәндәй, улар үҙҙәренең республикаһын – Саха (Яҡу)т иленең данын яҡлап килгән. Уларҙың “Яҡут тәме” тигән гастрономия туры турист маршруты финалға үтте һәм әңгәмәселәрем үҙҙәренең проектын яҡланы.

### Ышанысыбыҙ артты

Башҡортостанда ла этнотуризмды үҫтереү мөмкинлектәре киң булыуына ошо форумда йәнә бер инандыҡ. Бай күргәҙмәләр ҙә был ышанысты арттырҙы.

Мәҫәлән, Иглин районынан кейеҙ баҫыу оҫталары эргәһенән кеше өҙөлмәне. Балаларҙың художество мәктәбендә йәш быуынды кейеҙ баҫыу серҙәренә өйрәтәләр. Кейеҙ оҫталары Михаил Бадьин менән Ольга Серебреникова ҡунаҡтарға был эштең нескәлектәрен күрһәтте.

– Был йүнәлештә мәктәптә 20 йыллап тәжрибәбеҙ бар. Күптән түгел эштәребеҙ менән Санкт-Петербургта Башҡортостан көндәрендә ҡатнашып ҡайттыҡ. Үҙебеҙҙең районда кейеҙ буйынса республика семинарҙары уҙғарабыҙ. Быйыл Башҡортостан Башлығы Грантына лайыҡ булыуыбыҙ ҙа – ошо эшебеҙҙең һөҙөмтәһе. Грант сиктәрендә кейеҙ буйынса 40 оҫта әҙерләнек. Балалар ҙа яратып шөғөлләнә, яңы һөнәргә өйрәнә. Улар үҙҙәренә кейеҙҙән шапка, шарф, уйынсыҡтар эшләргә оҫтара, – тип һөйләне әңгәмәселәрем.

Форумда йәнә бер оҫта менән һөйләшеп өлгөрҙөк. Өфөнән Ирина Харисова ярты йыл самаһы элек сәс өсөн биҙәүестәр тегә башлаған. Ҡалпаҡ, маңлайсаларын да күрһәтте. Милли кейемдәр, биҙәүестәребеҙ менән ғорурланыуҙарын һәм кейеп йөрөүҙәрен теләйем, тигән фекерен белдерҙе ул.

Өфө ҡалаһынан Рәлиф Ситдиҡовтың күргәҙмәһенән дә милли ҡот бөркөлөп тора ине. Был йүнәлештә ул тормош иптәше, улы менән бергәләп эшләйҙәр. Түшелдерек, һаҡал, селтәр, бүректәр, шайморатка баш кейемдәрен тегәләр. Ғаилә башлығы ҡамсылар эшләүгә лә оҫтарған.

– Электән һәр өйҙә ҡамсы эленеп торған. Был иһә йорттоң хужаһы барлығын аңлатҡан. Үҙенең фекере, һүҙе булған ир-егет ҡамсыһыҙ йөрөмәгән. Ул уның менән ат та ҡыуған, һунарға ла барған, – тип һөйләне оҫта.

Халҡыбыҙ күңелендә тарихыбыҙ, йолаларыбыҙ һаҡланғанда, милли кейемдәрҙе тегеүселәр булғанда, милли аш-һыуҙарыбыҙ табындарыбыҙҙы биҙәгәндә, республикабыҙҙа этнотуризм да яңы бейеклектәргә күтәрелер.

podpiska.pochta.ru

БЕҘ – БЕРГӘ!



## “Ярҙам поезы” ярҙамға килә

Унда төрлө консультациялар алырға мөмкин

“Ватанды һаҡлаусылар” фондының республика филиалы махсус хәрби операция ветерандарына, һәләк булған яугирҙәрҙең ғаиләләренә һәр яҡлап ярҙам күрһәтеү өсөн “Ярҙам поезы” исеме менән күсмә ҡабул итеүҙәр ойоштора. Маҡсат ҙур – алыҫ райондарҙа һәм ҡалаларҙа йәшәүселәргә консультация ярҙамы күрһәтеү. ”Ярҙам поездары”нда фонд тәрбиәләнеүселәренең юристар, нотариустар, банк хеҙмәткәрҙәре консультацияларын, шулай уҡ медицина һәм психологик ярҙам алыу мөмкинлеге бар.

# Ярҙам төрҙәре өҫтәлеп тора

## МХО-ла ҡатнашыусылар ғаиләләре өсөн тыныс

✍ Әлфиә МИНҒӘЛИЕВА

**Махсус хәрби операция башланыу менән Башҡортостан егеттәре бөтә ил халҡы менән бергә Тыуған иле һағына баҫты. Улар алғы һыҙыҡта үҙҙәренең хәрби бурыстарын башҡарған ваҡытта, бында тылда уларҙың ғаиләләре тураһында хәстәрлек күрелә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән хәрбиҙәргә һәм уларҙың ғаиләһе ағзаларына бик күп ярҙам саралары индерелде, һәм улар эшләй ҙә башланы. Шулай уҡ федераль властар индергән ярҙам да бар. Һеҙҙмтәлә бөгөн Башҡортостанда 37 ярҙам сараһы эшләй. Түбәндә улар тураһында аныҡ мәғлүмәт.**



Фото: planeta.ru

**Бушлай йылы аш**

Кемгә тейеш: V–XI кластарҙағы мәктәп уҡыусылары, көндеҙге бүлектә уҡыған колледж студенттары.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: бала уҡыған мәктәпкә йәки колледжға.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: ярҙам мөрәжәғәт итеүҙең икенсе көнөнән күрһәтелә башлай һәм атаһы махсус хәрби операцияла ҡатнашып бөткәнгә тиклем ғәмәлдә була.

**“Һөт кухняһы”нан бушлай аҙыҡ-түлек**

Кемгә тейеш: йөклө ҡатындарға, бала имеҙгән әсәйҙәргә, өс йәшкә тиклемге балаларға.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: “Һөт кухняһы”ның яҡындағы таратыу пунктына, Күп функциялы үҙәк йәки мобиль ҡушымта аша.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

**Ҡала һәм ҡала яны автобустарында айына 60 тапҡыр бушлай юл йөрөү**

Кемгә тейеш: мәктәп уҡыусыларына һәм бөтә уҡыу йорттарының 23 йәшкә тиклемге студенттарына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: белем биреү ойошмаһына (мәктәп, колледж, университет).

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза, тыуыу тураһында таныҡлыҡ йәки паспорт күсермәһе, хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: юл хаҡы өсөн уҡыусы картаһы, “Алға” картаһы йәки “Мир” түләү системаһының банк картаһы менән түләргә мөмкин. Был карталар документтар менән бергә бирелә һәм ай һайын уларға 60 сәфәр хаҡы күсерелә. Лимитты тотоноп бөтмәһәң, ҡалғаны яна. Лимиттан юғарыраҡ булғандың барыһын да ҙаллы түләргә кәрәк. Льготалы юл йөрөү ҡаланың даими маршруттарында, әүкыусылар өсөн ҡала яны маршруттарында ла ҡаралған. Ҡаланан ситкә 50 километр алыҫлыкта үткән маршруттар һәм бөтә район-ара маршруттар ҡала яны маршруттары тип иҫәпләнә.

**Балалар баҡсаһына сираттан тыш урын**

Кемгә тейеш: йәш ярымдан алып балаларға.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: район йәки ҡала хакимиәтенең мәғариф бүлегенә.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

**Балалар баҡсаһы өсөн түләүҙән азат итеү**

Кемгә тейеш: балалар баҡсаһына йөрөгән бөтә балаларға ла.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: бала йөрөгән балалар баҡсаһына.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: ярҙам ғариза биргән көндән алып атаһы хәрби операцияла ҡатнашыуҙы тамамлаған осорға тиклем ғәмәлдә.

**Мәктәптә түләүһеҙ оҙайтылған көн төркөмө**

Кемгә тейеш: мәктәп уҡыусыларына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: бала уҡыған мәктәпкә.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: әгәр мәктәптә бындай төркөм юҡ, әммә ихтыяж бар икән, уны ойоштороға тәҡдим ителгән.

**Түләүһеҙ түңәрәктәр һәм секциялар**

Кемгә тейеш: мәктәп уҡыусыларына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: белем биреү ойошмаһына.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: сара дәүләт һәм муниципаль түңәрәктәр өсөн ғәмәлдә.

**Баланы уңайлы мәктәпкә күсереү**

Кемгә тейеш: мәктәп уҡыусыларына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: һайлап алынған мәктәпкә. Әгәр унда урын юҡ икән, йәшәгән урындағы мәғариф бүлегенә.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

**Колледжда бушлай уҡыу**

Кемгә тейеш: абитуриенттарға һәм колледжда уҡып йөрөгәндәргә.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: колледжды ойоштороусы министрлыҡҡа (ведомстволың сайтында ҡарарға була).

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза, хәрби комиссариаттан белешмә, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы менән туғанлыҡ кимәлен дәлилләгән белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: бала уҡырға инеп кенә йөрөй икән, аттестаттың уртаса балына ҡарамаҫтан, бюджетҡа инәсәк, әммә һөнәр ҡабул итеү имтихандарын күҙ уңында тотһа, ыңғай һөҙөмтәләр кәрәк. Әле бала коммерция төркөмө студенты икән, уны бушлай уҡытыуға күсерәләр. Һөнәре буйынса бюджет урындары булмаһа, уҡыу өсөн сертификат менән түләнәсәк.

**Ятаҡта урын**

Кемгә тейеш: ссуз һәм вуз студенттарына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: белем биреү ойошмаһына.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

**Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары өсөн лагерға юлламалар**

Кемгә тейеш: 18 йәшкә тиклемге балаларға.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: бала йәшәгән урындағы мәғариф бүлегенә.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза, тыуыу тураһында таныҡлыҡ йәки паспорт күсермәһе, хәрби комиссариаттан белешмә, махсус

БАШҠОРТОСТАН ШИФАХАНАЛАРЫНА БУШЛАЙ ЮЛЛАМАЛАР

КЕМГӘ ТЕЙЕШ: МАХСУС ХӘРБИ ОПЕРАЦИЯЛА ҠАТНАШЫУСЫЛАР ҺӘМ УЛАРҘЫҢ БАЛАЛАРЫ. МАХСУС ХӘРБИ ОПЕРАЦИЯЛА ҠАТНАШЫУСЫЛАРҘЫ “ЯНҒАНТАУ”, “КРАСНОУСОЛ”, “ЙОМАТАУ”, “ЯҠТЫКҮЛ”, “ТАНЫП”, “АССЫ”, “ЙӘШЕЛ САУҠАЛЫҠ”, “ҠАРАҒАЙ” ШИФАХАНАЛАРЫ ҠАБУЛ ИТӘ, Ә БАЛАЛАР ИҺӘ БАЛАЛАР УЧРЕЖДЕНИЕЛАРЫНДА ҺАУЛЫҒЫН НЫҒЫТА.

ИҒТИБАР!

**Кем махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының ғаиләһе ағзаһы тип иҫәпләнә?**

Рәсми ҡатыны. Әгәр махсус операцияға шәфҡәт туташы булып ҡатын-ҡыҙ китһә, уның рәсми ире. Ата-әсәһе йәки хеҙмәткә яраҡһыҙ йәштәге уллыҡҡа алыусылар (инвалидтар һәм пенсионерҙар). Өләсәһе һәм олатаһы, әгәр ата-әсәһе булмағанлыктан өс йылдан ашыу тәрбиәләгән һәм ҡараған булһалар. Хеҙмәткә яраҡһыҙ йәштәге үгәй атаһы менән үгәй әсәһе, әгәр биш йылдан ашыу тәрбиәләгән һәм ҡараған булһалар. Бәлиғ булмаған балалар һәм 23 йәшкә тиклемге студент-балалар. 18 йәшкә тиклем инвалид булған бәлиғ балалар. Барлыҡ льготаларҙы алыу өсөн төп документ – хәрби мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә саҡырылғанлығы йәки контракт буйынса хеҙмәт иткәнен раҫлаған белешмә. Уны ғаилә ағзалары йәшәгән урындағы хәрби комиссариаттан ала.

podpiska.pochta.ru

## БЕҘ – БЕРГӘ!



# Йылы офисын ҡалдырып…

### “Айболит” доставаловсылар батальонында хеҙмәт итә

Октябрьский ҡалаһында йәшәгән “Айболит” позывнойлы яугир йылы офисын окопҡа алмаштырған. Беренсе һөнәре буйынса ул табип, шулай уҡ нефть университетын да тамамлаған. Һуңғы йылдарҙа Себерҙә эшләгән һәм бырауылау буйынса алдынғы инженер булған. Йылы офиста ултырып, һәйбәт эш хаҡы алған. Тик бер мәл ул үҙенең тәүге һөнәрен – тибип булыуын иҫенә төшөргән һәм, МХО-ға барып, яралыларҙы дауаларға ҡарар иткән. Әле ул Доставалов исемендәге батальонда бер йылдан ашыу хеҙмәт итә, медицина взводы командиры урынбаҫары. Бик күп егеттәрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалған.



Фото: planeta.ru

хәрби операцияла ҡатнашыусының паспорты күсермәһе.

**Башҡортостан шифаханаларына бушлай юлламалар**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың балалары.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы “Янғантау”, “Красноусол”, “Йоматау”, “Яҡтыкүл”, “Танып”, “Ассы”, “Йәшел сауҡалыҡ”, “Ҡарағай” шифаханалары ҡабул итә, ә балалар иһә балалар учреждениеларында һаулығын нығыта.

**Өйҙә бушлай социаль хеҙмәттәр күрһәтеү йәки сираттан тыш йорт-интернаттарға урынлаштырыу**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының пенсия йәшенә еткән инвалидлығы булған йәки ярҙамға мохтаж ата-әсәһенә, йәки уның законлы вәкилдәренә.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: 8-800-775-00-14 ҡыҙыу элемтә телефоны буйынса Республика халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәгенә (Өфө, Менделеев урамы, 136/2, йәғни 7(347)286-51-05) мөрәжәғәт итергә йәки “Дәүләт хеҙмәттәре” порталы аша рәсмиләштерергә.

Ниндәй документтар кәрәк: МСЭ белешмәһе (инвалидлыҡ тураһында), Пенсия фондынан белешмә (кешенең пенсияла булыуы тураһында), кешегә ҡарау кәрәклеген дәлилләгән медицина белешмәһе, хәрби комиссариаттан белешмә.

**Көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеү**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың бөтә ғаилә ағзаларына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: Шайморатов исемендәге штабҡа – 8 (800) 201-89-03, көн һайын 9-ҙан 18 сәғәткә тиклем; республика Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты штабына +7(927) 311-23-55 телефоны буйынса йәки Өфө

БАҘАР ХАҠЫНАН ТҮБӘНЕРӘК ХАҠҠА ТОРЛАҠ
КЕМГӘ ТЕЙЕШ: МАХСУС ХӘРБИ ОПЕРАЦИЯЛА ҠАТНАШЫУСЫЛАРҒА ҺӘМ УЛАРҘЫҢ ҒАИЛӘ АҒЗАЛАРЫНА.
ОШО ХАҠТА БЕЛЕРГӘ КӘРӘК: МИЛЕКТӘ ТОРЛАҠ БУЛЫУ-БУЛМАУЫНА ҠАРАМАҪТАН, “БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ТОРЛАҠ ТӨҘӨЛӨШӨН ҮҪТЕРЕҮ ФОНДЫ”НАН БАҘАР ХАҠЫНАН ТҮБӘНЕРӘК ХАҠҠА ФАТИР АЛЫУ МӨМКИНЛЕГЕ БАРЛЫҠҠА КИЛӘСӘК.

ҡалаһы, Пушкин урамы, 86/11 адресы буйынса ирекмәндәр штабына (“Йәшлек House”, Башҡортостан йәштәре йорто), ғаризалар көн һайын 9 сәғәттән 18 сәғәткә тиклем ҡабул ителә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: Шайморатов исемендәге штабтың ирекмәндәре социаль, психологик, йорт һәм хужалыҡ буйынса көнкүреш ярҙамы күрһәтә, ғариза биреүсе иҫәбенә беренсе кәрәк-яраҡ әйберҙәрен – мәҫәлән, дарыухананан дарыу һәм аҙыҡ-түлек килтерә, утын яра, урамды ҡарҙан таҙарта ала.

Әгәр һеҙ үҙегеҙ ирекмән булырға – махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың туғандарына һәм ғаиләләренә ярҙам итергә теләһәгеҙ, колл-үҙәк телефоны буйынса йәки “Берҙәм Рәсәй”ҙең Башҡортостан биләмәһендәге теләгән бер бүлексәһенә мөрәжәғәт итегеҙ.

**Билдәләнгән хаҡтың 10 процентын түләп утын алыу**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләһенә.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: муниципалитеттың урман хужалығына.

Ниндәй документтар кәрәк: хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: әгәр утынды үҙегеҙ әҙерләһәгеҙ, ташлама буласаҡ. Әҙер утын һатып алһағыҙ, уны бушлай килтерәсәктәр. Шулай уҡ урман хужалығына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Түләүһеҙ сүп-сар сығарыу**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләһенә.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: сүп-сарҙы сығарыу буйынса үҙегеҙҙең төбәк операторына.

Ниндәй документтар кәрәк: ғариза һәм хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: ташлама граждан махсус хәрби операцияла ҡатнашыу осоронда ғәмәлдә.

**“Торлаҡ өсөн аҡса туплау” программаһында ташламалы ҡатнашыу**

Кемгә тейеш: ошоғаса программаға ингән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: +7(347) 285-00-97 ҡыҙыу элемтәһенә.

Ниндәй документтар кәрәк: хәрби комиссариаттан белешмә, программала ҡатнашыусынан ышаныс ҡағыҙы.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: тупланмаға иҫәпләнгән бюджет премияһы менән бергә аҡсаны ваҡытынан алда алырға йәки штраф санкцияларынан тыш программала ҡатнашыуҙы туҡтатып торорға һәм кире ҡайтҡас тергеҙергә мөмкин.

**Баҙар хаҡынан түбәнерәк хаҡҡа торлаҡ**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: милектә торлаҡ булыу-булмауына ҡарамаҫтан, “Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фонды”нан баҙар хаҡынан түбәнерәк хаҡҡа фатир алыу мөмкинлеге барлыҡҡа киләсәк.

**Эшкә урынлашҡанда шәхси ярҙам**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының эш эҙләгән ғаилә ағзаһына.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: үҙегеҙҙең мәшғүллек үҙәгенә.

Ниндәй документтар кәрәк: хәрби комиссариаттан белешмә.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың вузда йәки колледжда уҡыуын тамамлаған балалары предприятиеларҙа стажировка үтә ала.

**Йортҡа газ үткәреү өсөн кәмендә 100 мең һумлыҡ сертификат**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: ярҙамдың был төрө буйынса документтар әле әҙерләнә.

**Транспорт һалымын түләүгә 100 процентлыҡ ташлама**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары.

**Кредит каникулы**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: банк йәки микрофинанс ойошмаһына.

Ниндәй документтар кәрәк: банк һораған документтар.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: кредит каникулы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы йәки уның ғаилә ағзаһы булған заемсыға кредит йәки займ буйынса түләүҙәрҙе ваҡытлыса туҡтатырға мөмкинлек бирә. Әгәр заемсы закон критерийҙары буйынса үтһә, кредиторҙың (банк, микрофинанс ойошмалары, КПК, СКПК, ломбард) кредит каникулын биреүҙән баш тартыу хоҡуғы юҡ. Төп һорауҙарға яуаптарҙы Үҙәк банк сайтында уҡығыҙ.

**Ғаиләнең мохтажлығын баһалағанда махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың килеме иҫәпкә алынмай**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының ғаиләләренә.

Ҡайҙа мөрәжәғәт итергә: халыҡты социаль яҡлау идаралығына.

Ниндәй документтар кәрәк: хәрби комиссариаттан документтар.

Ошо хаҡта белергә кәрәк: улар төрлө “балалар” пособиеларына, шул иҫәптән 3 – 17 йәшкәсә балаларға айлыҡ түләүҙәргә, йөклөлөк буйынса иҫәпкә торған ҡатындарға пособиеларға, күп балалы ғаиләләргә түләүҙәргә, күп балалы ғаиләләргә коммуналь түләүҙәргә компенсацияларға, социаль контракт алыуға һәм башҡаларға ҡағыла.

**Пеня түләүҙән азат итеү**

Кемгә тейеш: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусының ғаиләһенә.

Нимәне белергә кәрәк: махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары коммуналь хеҙмәттәрҙе һәм капиталь ремонт өсөн ваҡытында түләмәгән осраҡта пеня түләмәй.

**Консультациялар һәм психолог ярҙамы**

“Ғаилә” үҙәктәренең ҡыҙыу бәйләнеше: 8-800-347-5000.

Ғаилә хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре бушлай социаль түләмдәргә документтар әҙерләргә, балалар менән көнкүреште ойоштороу, алименттар алыу, васыятты рәсмиләштереүҙә ярҙам итәсәк.

Һаулыҡ һаҡлау министрлығының республика клиник психотерапия үҙәге: +7 (347) 241-62-85.

**Һәм иғтибарығыҙға яңы саралар тураһында мәғлүмәт.**

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы грант алып план күрһәткестәрен үтәмәгән саҡта яуаплылыҡтан азат ителә. Яугирҙәрҙең балалары өйө янындағы балалар баҡсаһына күсә ала. Шулай уҡ махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары тәүге сиратта физкультура-спорт ойошмаларына яҙылыу хоҡуғы ала.

Бынан тыш, республикала Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булған йәки махсус хәрби операциялағы ҡаҙаныштары өсөн федераль ордендар менән наградланған кешеләргә һәм уларҙың ғаилә ағзаларына бушлай ер участкаһын биреү тураһында закон проекты эшләнгән.

Шулай уҡ ауыл ерендә йәшәгән МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзаларының торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға социаль түләүҙәр бүлергә планлаштыралар. Яугирҙәр һәм уларҙың ғаилә ағзалары мәҙәниәт һәм күңел асыу учреждениеларына ташламалы йөрөй ала.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ



**Гуманитар ярҙам йыйыу дауам итә**

Изге ғәмәлгә һәр кем ҡушыла ала

Ғафури районының ирекмәндәр штабы Красноусол ауылының Октябрь урамында урынлашҡан 2-се йортта гуманитар ярҙам йыя. Эш көндәрендә иртәнге 9-ҙан киске 18 сәғәткә тиклем мөрәжәғәт итергә мөмкин. Белешмәләр өсөн телефон: 8 (34740)2-12-96.

# Берҙәмлектә – көсөбөҙ!

## Ғафуриҙар яугирҙәребеҙҙе ярҙамдан өҙмәй

✍ Айһылыу НИЗАМОВА

Ғафури районы

**Илгә бәлә килгәндә берҙәм һәм бергә булыу яҡшы – был осраҡта яҡшы киләсәккә өмөт тә артҡандан-арта. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү йәһәтенән Ғафури районы хакимиәте урындағы үҙидара органдары менән берлектә ҙур эш башҡара: гуманитар ярҙам туплап, алып барыуҙы ойоштора. Шулай итеп, яугирҙәр менән бәйләнеш өҙөлмәй. Муниципаль власть һәм ауыл советтары вәкилдәре махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләрен, яҡындарын борсоған мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ярҙам күрһәтә. Урындағы халыҡ иһә яугирҙәребеҙҙе ярҙамдан өҙмәй, ҡулынан килгәнсә гуманитар ылау туплауҙа ҡатнаша.**



Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.

**Лилиә Булат ҡыҙы Ғөбәйҙуллина махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ире Илнур Миңләхмәт улы тураһында тыныс ҡына һөйләй алмай.**

СӘЛӘМӘТЛЕГЕ НЫҠ БУЛҒАН, НАСАР ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮҘӘТЕЛМӘГӘН, ХӨКӨМ ИТЕЛМӘГӘН 18 – 60 ЙӘШЛЕК ИР-ЕГЕТТӘР ХӘРБИ КИЛЕШЕҮ БУЙЫНСА ХЕҘМӘТ ИТӘ АЛА. КАНДИДАТ ТАЛАП ИТЕЛГӘН ХӘРБИ БЕЛГЕС БУЛҺА, 65 ЙӘШКӘ ТИКЛЕМ ДӘ ХЕҘМӘТКӘ АЛЫУ МӨМКИНЛЕГЕ БАР. БЫЙЫЛ АПРЕЛДӘН БАШЛАП, АРМИЯЛА ХЕҘМӘТ ИТМӘГӘНДӘР ҘӘ КИЛЕШЕҮ ТӨҘӨЙ АЛА.

### Ылау тәғәйен урынға барып етте

Күптән түгел Ғафури районынан махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн сираттағы гуманитар ылау оҙатылды һәм тәғәйен урынға алып барып еткерелде. Быға тиклем дә, әле лә ғафуриҙар яугирҙәребеҙгә ярҙам итеүҙән туҡтамай. Был юлы дүрт “УАЗ” автомобиле, радиостанциялар, тепловизорҙар, тактик наушниктар, маскировка селтәрҙәре, дүрт электр генераторы, биш бензобысҡы, шөрөп борғостар, башҡа кәрәкле инструменттар, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек һәм уҡыусыларҙың хаттары менән барлығы 150 ҡумта ебәрелде. “Ғафури районын үҫтереүгә булышлыҡ итеү” хәйриә фонды иҫәбе аҡсаһына ике машина алынған. Бер “УАЗ”-ды “ГИП-Электро” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте биргән, тағы бер “УАЗ”-ды хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең туғандары тапшырған.

### Хәрби хеҙмәт килешеүен төҙөйҙәр

Контракт буйынса армия хеҙмәтенә кешеләр йыйыу йәһәтенән дә Ғафури районы – Рәсәй Оборона министрлығында яҡшылар иҫәбендә. Был илебеҙ өсөн ҡатмарлы осорҙа күптәрҙең Ҡоралды Көстәр сафына баҫырға әҙер булыуын, вайымһыҙ түгел икәнлеген күрһәтә. Кемдер таныштарының хеҙмәт итеүенән өлгө ала, бәғзе берәүҙәр үҙҙәре ошондай ҡарарға килә. Өҫтәүенә, һәр кем дәүләттең, республика һәм райондың махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеүен ишетеп кенә түгел, күреп тә белә. Был да Тыуған илде һаҡлауҙың мөһимлеген аңларға булышлыҡ итә.

Сәләмәтлеге ныҡ булған, насар ғәҙәттәре күҙәтелмәгән, хөкөм ителмәгән 18 – 60 йәшлек ир-егеттәр хәрби килешеү буйынса хеҙмәт итә ала. Кандидат талап ителгән хәрби белгес булһа, 65 йәшкә тиклем дә хеҙмәткә алыу мөмкинлеге бар. Быйыл апрелдән башлап, армияла хеҙмәт итмәгәндәр ҙә килешеү төҙөй ала. Хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар иһә үҙҙәренең контрактҡа ҡул ҡуйыуы тураһында саҡырыу комиссияһына әйтеү мөмкинлегенә эйә һәм ул үҙ сиратында ҡарар ҡабул итә.

Теләгән һәр кем ентекле һайлап алыу үтә. Беренсе этапта улар менән психологтар әңгәмәләшә, медицина тикшереүе үткәрелә. Барыһы ла яҡшы икән, улар менән килешеү төҙөлә һәм Рәсәй биләмәһендәге төрлө хәрби частарға ебәрелә. Әйткәндәй, ғәскәр төрөн һайлау һәр кешенең хәрби-иҫәп һөнәренә бәйле. Ғафуриҙар, нигеҙҙә, мотоуҡсылар, танкистар, десант һәм башҡа ғәскәрҙәр рәтен тулыландыра. Хәрби килешеү буйынса хеҙмәт итеүселәр өсөн иһә ҙур түләүҙәр, һөнәри һәм карьера үҫеше кеүек төрлө ярҙам һәм дәртләндереү саралары ҡаралған.

Тыуған илебеҙҙе, Ватаныбыҙҙы дошмандан һаҡлау, яҡлау өсөн, әлбиттә, үҙебеҙ күтәрелергә тейеш. Ниндәй генә осор булмаһын, беҙҙең ир-егеттәр һәр саҡ сыҙамлы, тәүәккәл, ҡыйыу һәм батыр булыуы менән айырылып торҙо. Илгә хәүеф янағанда ситтә тороп ҡалмайҙар. Әйткәндәй, Ғафури районынан Рәсәй Ҡоралды Көстәрендә хеҙмәт итергә теләгәндәр район үҙәге Красноусол ауылындағы хәрби-иҫәп пунктына мөрәжәғәт итә ала. Ул район үҙәгенең К. Маркс урамындағы 14-се йортта урынлашҡан. Ғаризаны өйҙән сыҡмайынса “Дәүләт хеҙмәттәре” сайтына инеп, “Ирекмән йәки контракт буйынса хеҙмәткәр булыу” хеҙмәте йәки Рәсәй Оборона министрлығы сайтындағы шәхси кабинетта яҙырға мөмкин. Электрон төрҙә бирелгән бөтә ғаризалар һайлап алыу пункттарына ебәрелә.

### Әрме сафтарында булмаһа ла...

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың барыһын да ғаиләләре, туғандары, яҡындары, дуҫтары, ауылдаштары һәм райондаштары көтә. Ғафури районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге етәксеһенең дөйөм мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Лилиә Булат ҡыҙы Ғөбәйҙуллинаның ире Илнур Миңләхмәт улы ла Тыуған илебеҙҙе дошмандарҙан һаҡлау өсөн хәрби килешеү төҙөгән. “Иремдең был ҡарарын тыныс ҡына ҡабул итә алманым, әлбиттә. Төрлө уйборсолоуҙар үтте башымдан. Әле лә имен-һау йөрөһөн, тип хәүефләнәм һәм уның шылтыратыуын көтәм”, – ти Лилиә Булат ҡыҙы. Ғәзиз кешеһен оҙатҡанда эстән әллә күпме ут йотһа ла, тормош иптәшенең рухын һындырмайым, кәйефен ҡырмайым, терәк-таяныс булайым тип, күҙ йәштәрен йәшереп, йылмайырға тырыша һәм Хоҙайҙан уның имен-һау тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтыуын һорап ялбара...

Лилиә Булат ҡыҙы Мәләүез ҡалаһында тыуып үҫһә лә, атаәсәһе Рәйлә менән Булат Сираевтар сығышы менән – Ғафури районының күркәм ауылы Сәйетбабанан. “Атайым – Мәләүездәге химия заводында, әсәйем балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләне. Үҙем иһә бала саҡтан китапханасы булып эшләргә ынтылдым һәм был маҡсатымды тормошҡа ашырыр өсөн Өфө китапхана колледжына уҡырға индем, аҙаҡ Силәбе мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһын тамамланым”, – ти ҡатын. Тап ошо китапханасы һөнәре буйынса Красноусолдағы район мәҙәниәт йортонда эшләгәндә тормош юлдашы менән таныша. Ул саҡта Илнур Ғөбәйҙуллин, Өфө сәнғәт училищеһын тамамлап, ҡурайсы булып эшләгән була. “Ғаилә ҡороуыбыҙға быйыл – 18 йыл”, – ти Лилиә Булат ҡыҙы. Хәҙер уңған ғаиләлә бына тигән ике ҡыҙ үҫә. Өлкәндәре Илнара Красноусолдағы 2-се мәктәптә XI класта белем ала. Ул инглиз телен бик теләп өйрәнә. Ә кесеһе Наҙгөл – ошо уҡ белем усағының VIII класс уҡыусыһы, театр түңәрәгенә йөрөй. Балалар атайҙарының өйгә тиҙерәк имен-һау әйләнеп ҡайтыуын, яндарында булыуын теләй.

Һуңғы йылдарҙа Илнур Миңләхмәт улы Себерҙә вахта буйынса эшләгән. “Быйыл мартта махсус хәрби операцияға хәрби килешеү буйынса юлланырға ҡарар итеүе тураһында әйтте, – ти Лилиә Булат ҡыҙы. – Башта ҡыҙҙар ҙа баҙап ҡалды, әлбиттә. Шулай ҙа иремдең уй-теләгенә ҡаршы сыҡманыҡ”.

Шулай итеп, Илнур Ғөбәйҙуллин әрме хеҙмәтендә булмаһа ла, Тыуған илебеҙҙе һаҡлау кәрәклеге тураһында ҡарар ҡабул иткән һәм уны дошмандарҙан ҡурсыр өсөн юлланған. Быйыл 10 майҙа ул Советтар Союзы Геройы, генерал-майор Таһир Күсимов исемендәге бишенсе ирекле батальон составында Һамарҙағы хәрби күнекмә урынына оҙатылған. Аҙаҡ улар махсус хәрби операция биләмәһенә юлланған.

Белеүебеҙсә, был батальон – башҡорт ирекле мотоуҡсылар полкының бер өлөшө, һәм ул “Башҡортостан” тигән исемде йөрөтә. Унда бер сафта, иңгә-иң терәп, республикабыҙ яугирҙәре хеҙмәт итә.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан егеттәргә ябай булмаған ҡарар ҡабул итеүҙәре өсөн рәхмәт белдерәбеҙ. Уларға, үҙҙәренең бурысын намыҫ менән үтәп, тыуған яҡтарына иҫән-имен ҡайтыуын теләйбеҙ.

## УҠЫТЫУСЫ ҺӘМ ОСТАЗ ЙЫЛЫ



### 15 лауреаттың береһе – яҡташыбыҙ

Абруйлы конкурсҡа йомғаҡ яһалды

Мәскәүҙә үткән “Педагог-психолог-2023” Бөтә Рәсәй конкурсының “Сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балалар менән эшләүҙә профессиональ һәм ижади ҡараш” номинацияһында Стәрлетамаҡ ҡалаһының 25-се коррекцион мәктәбе уҡытыусыһы Екатерина Мамонтова еңеп сыҡты. Яҡташыбыҙҙы ҙур еңеүе менән ҡотлайбыҙ!

# Иң ғәҙел, иң сабыр һөнәр эйәләре улар

## Нәҫел педагогтарының стажы – 500 йыл

✍ Динә АРЫҪЛАНОВА

Илеш районы

**Билдәле бер шағирыбыҙҙың: *“Уҡытыусы беҙҙең өсөн Тиң ине пәйғәмбәргә, Әйткәндәре ҡанун булды Беҙ – хәйләһеҙ йәндәргә”*, – тип хөрмәтләүе күптәребеҙ өсөн бик яҡын да, ғәҙел дә кеүек. Йәш быуынды тәрбиәләүсе, ил киләсәген генә түгел, ер киләсәген дә хәл итеүсе, республика үҫешенә ҙур өлөш индереүсе, кәңәшсе, һәр баланың яҙмышында яҡты эҙ ҡалдырыусы шәхестәр оҙаҡ йылдар хәтерҙән сыҡмай, ваҡыт үткән һайын уларҙың хеҙмәтен юғарыраҡ баһалайһың төҫлө. Һәр кемдең күңелендә мәңгелеккә уйылған, һине уйламаған киҫкен боролоштар яһарға мәжбүр иткән, һөнәр һайлағанда юл күрһәткән, һиңә ышаныс менән ҡараған, кешелек ҡиммәттәрен баһаларға өйрәткән остаздар, уҡытыусылар була. Моғайын, кемдән генә һораһаң да, уларҙың яҙмышында ла ярҙам итеп, хәл иткес мәлдә этәргес, кәңәшсе булған остаздар осрауын әйтерҙәр ине, сөнки уҡытыусы – донъяла иң ғәҙел, иң сабыр, иң кәрәкле һөнәр эйәһе.**



“Яңы уҡыу йылын яңыртылған мәктәптә башланыҡ”, – ти Фәриҙә Әмирйән ҡыҙы.



Айрат Нурмөхәмәтов фотолары.

### Эстән дә, тыштан да хозур

Йәмле йәйге көндәрҙең береһендә Илеш районының Йөннө мәктәбендә шау-гөр килеп ремонт эштәре барған ваҡытҡа тура килеп, уҡытыусының кәрәк икән прораб, төҙөүсе, биҙәүсе, йыйыштырыусы була алыу оҫталығын да күрҙек. Яңы уҡыу йылына әҙерлек, уҡыусыларға белем алыу өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу, кәрәкле әсбаптар, ҡорамалдар менән йыһазландырыу уҡытыусы күҙенән, иғтибарынан ситтә ҡала алмай. Ремонт эштәрен күҙәтеп, тиҙләтеп, кәрәк сағында эшселәрҙең күңелен күтәрерлек һүҙҙәр табып, беҙҙе йылмайып ҡаршы алған мәктәп директоры Фәриҙә Әмирйән ҡыҙы Миңлеғолова быйыл 110 йыллығын ҡаршылаған Йөннө төп белем биреү мәктәбе коллективының яңы уҡыу йылында яңыртылған бинала эш башлаясағына һөйөнөп бөтә алмай. 1968 йылда төҙөлгән мәктәп бинаһын үҙгәртеп ҡороу өсөн күп көс һалынған. Уҡыу кабинеттарынан тыш, ял зонаһы, туҡланыу блогы булдырылған, һауыт-һаба йыуыу машинаһы алынған, канализация үткәрелгән, ҡаҙанлыҡ ҡуйылған, спорт залы бар.

– “Урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү” программаһы буйынса 89 тәҙрәне алмаштырҙыҡ. Сығымдарҙың ун процентын халыҡ үҙе түләне. Тышын сайдинг менән көпләгәс, бинабыҙ ҡупшы ҡурсаҡ өйөндәй булды. Биләмәлә мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн айырым бина ла бар. Мәктәптә асылған “Үҫеш нөктәһе”нә ҙур өмөт бағлайбыҙ, махсус белем биреү үҙәгенең эшмәкәрлегe балаларҙы һанлы, тәбиғи-фәнни, техник һәм гуманитар профилдәр буйынса әҙерләүгә йүнәлтелгән. Химия, физика, биология буйынса ҡорамалдар килтерелде. Ун компьютер һәм шунса ноутбук алдыҡ, ике информатика кабинеты эшләйәсәк. 67 уҡыусыбыҙҙың 27-һе өлкән кластарҙа уҡый, хәҙер улар өсөн өр-яңы мөмкинлектәр, офоҡтар асыла, – тип шатлығын уртаҡлашты Фәриҙә Әмирйән ҡыҙы.

Республикабыҙҙа мәктәптәрҙең йөҙө генә түгел, эске йөкмәткеһе лә үҙгәреүе – заманға хас яҡшы күренеш. Әммә беҙҙе бөгөн сыйырсыҡтар һайрауы тынмаған йәшелсә, еләк-емеш баҡсаһы, ағас ботаҡтарына эленгән ҡырҡтан ашыу ҡош ояһы әсир итте. Ауыл балаларының хеҙмәттән ҡурҡмауы, ерҙә ең һыҙғанып эшләй белеүе сер булмаһа ла, уларҙың йәй буйы мәктәп биләмәһендә алма, сейә, ҡарағат, еләк тәрбиәләп, ҡышҡылыҡҡа етерлек компот әҙерләүе, кишер, кәбеҫтә һәм башҡа йәшелсә үҫтереүе маҡтауға лайыҡ. Бөтә был мәшәҡәттәрҙең башында тынғыһыҙ уҡытыусының йөрөүе, ойоштороуы, балалар менән аңлатыу эштәре алып барыуы көн кеүек асыҡ.

### Лайыҡлы алмаш

Ошо яуаплы профессияға үҙен арнаған хеҙмәт династиялары, һис һүҙһеҙ, һоҡланыу тойғолары уята. Райондағы Зөбәйеров-Яҡуповтар нәҫеленә күҙ һалһаң да, бер нәҫел кешеләренең ең һыҙғанып, ҙур дәрт

**РЕСПУБЛИКАБЫҘҘА МӘКТӘПТӘРҘЕҢ ЙӨҘӨ ГЕНӘ ТҮГЕЛ, ЭСКЕ ЙӨКМӘТКЕҺЕ ЛӘ ҮҘГӘРЕҮЕ – ЗАМАНҒА ХАС ЯҠШЫ КҮРЕНЕШ.**

менән белем биреү өлкәһендә эшләүен, лайыҡлы алмаш әҙерләү өсөн тырышлыҡ һалыуын күрәһең. Шуларҙың араһында бөгөнгө танышыбыҙ, Йөннө мәктәбе директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы Фәриҙә Миңлеғолова (Зөбәйерова) айырым урын алып тора. Бик егәрле, һәр эште теүәллек менән башҡарырға ғәҙәтләнгән, хеҙмәте менән ауылдаштарының хөрмәтен яулаған Лилиә Яҡупова һәм Әмирйән Зөбәйеровтар ғаиләһендә береһенән-береһе гүзәлерәк дүрт ҡыҙҙың донъяға килеүе ата-әсә өсөн шатлыҡ, көтөп алынған бәхет була. Заманында шофер, автомеханик, “тимер ат”тарҙы эйәрләүсе, автогараж мөдире булып эшләгән ғаилә башлығы һәр эште хәрбиҙәрсә теүәллек, йылдамлыҡ һәм яуаплылыҡ менән башҡара. “Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре” тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була колхозсы, Бөтә Союз халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә ҡатнашыу бәхете тейә. Бындай хеҙмәт һөйөүсән ғаиләлә ата-әсә миҫалында тәрбиәләнеп, “атанан күреп уҡ юнған, әсәнән күреп тун бескән”, өлгөр балалар үҫеп буйға етеүе ғәжәп тә түгелдер. Халыҡ әйтмешләй, “алма ағасынан алыҫ тәгәрәмәй”. Ҡыҙҙар буй еткереп, һөнәр һайлар мәл еткәс, өсәүһе һис икеләнеүһеҙ – педагогия өлкәһен, дүртенсеһе медицина юлын һайлай. Фәриҙә һәм Роза яҙмыштарын тыуған яҡтары, яҡташтары тормошо менән бәйләй, район мәктәптәрендә балалар уҡыта.

Роза Әмирйән ҡыҙы хеҙмәт юлын Ҡәҙер урта мәктәбендә пионервожатый вазифаһында башлай. Күп яҡлы, мауыҡтырғыс эштә ҡайнап, һөнәрен бирелеп башҡарған йәш белгес ата-әсәләр, уҡытыусылар араһында ихтирам яулай. Ҡыҙҙың артабан үҫкеһе, юғары белем алғыһы килә. Ҙур теләге уны Бөрө педагогия институтына килтерә, аҙаҡ рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып китә. Был фәндең өҫтөнлөктәре ифрат күп, балалар күңелен аңлауҙа, уртаҡ тел табыуҙа, тәрбиә биреүҙә ул алмаштырғыһыҙ, бары мөмкинлектәрҙе файҙалана белергә кәрәк. Үрге Йәркәйҙә район хакимиәтенең мәғариф бүлегендә методист, методика кабинеты мөдире, инспектор вазифаларында эшләргә тура килә. Районда республика кимәлендәге семинарҙар юғары кимәлдә үтә, хеҙмәттәштәре “Йыл уҡытыусыһы” конкурстарында, фән олимпиадаларында уңыштар яулай, сөнки тәжрибәле педагог башҡаларҙан да сифатлы эш талап итә, йәш белгестәрҙә ынтылыш һәм дәрт уята белә. Үрге Йәркәйҙәге 1-се урта мәктәпкә директор итеп тәғәйенләнгәс, уға уҡыу йортоноң техник базаһын нығытыу, ремонт үткәреү һәм башҡаларҙың күҙенә салынмаған мәшәҡәттәрҙе йырып сығырға тура килә. Мәктәп системаһының үҙенә генә хас нескәлектәре, ауырлыҡтары етерлек. Һәр баланың сәләмәтлеге, ғүмере өсөн яуаплылыҡ ҙур, белем һәм тәрбиә биреү өсөн шарттар тыуҙырыу мотлаҡ.

Коллектив менән эште ойоштороу, ата-әсәләрҙең һорауҙарына яуап биреү – барыһы ла ҡатын-ҡыҙ етәксе иңендә. Капиталь ремонттан һуң, гимназия статусын алыу өсөн байтаҡ ишекте шаҡырға, һөйләшеүҙәр алып барырға, кәңәшләшергә тура килә. Бөгөн гимназия – техник базаһы ныҡлы, тотороҡло булған, заманса уңайлы шарттар тыуҙырылған, кадрҙар менән тәьмин ителгән күркәм белем йорто. Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы Роза Әмирйән ҡыҙы Тимуршина (Зөбәйерова), хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, хеҙмәттәштәренең уңыштарын уртаҡлашып, уҡыу йортоноң тормошо менән ҡыҙыҡһынып йәшәй.

Әмирйән ағайҙың тағы бер ҡыҙы – Фәйрүзә Рамазанова ла ата-әсәһенең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәгән, тырыш хеҙмәте, эшкә ижади ҡарашы өсөн Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының Почет грамотаһы менән бүләкләнгән. Йөннө мәктәбенең алмаштырғыһыҙ етәксеһе Фәриҙә Миңлеғолова – бөгөн уҡытыусылар династияһын лайыҡлы дауам итеүселәрҙең береһе. Хеҙмәт юлын тап ошо мәктәптә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һәм өлкән пионервожатый булып башлаған ҡыҙҙың тырышлығын һәм белемле булыуын күреп, бер йыл үтеүгә директорҙың уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. 2000 йылдан алып ошо мәктәп коллективында эш өсөн янып-көйөп уҡыусыларға белем биреүен дауам итә. Ауылдаштары уны айырыуса ябайлығы, асыҡлығы, үҙ-үҙенә талапсанлығы өсөн ихтирам итә. Йәш белгестәрҙе ҡатмарлы ла, ҡыҙыҡлы ла педагог һөнәре серҙәренә өйрәтеүсе остаз да ул. Уның дәрестәре мауыҡтырғыс китап кеүек, тиҙерәк уҡығы, тын да алмай тыңлағы ла тыңлағы килә, ти уҡыусылары. Әҙәби әҫәрҙәр, публицистика һәм бай тормош тәжрибәһен ҡулланып, өлкән класс уҡыусыларына йәштәрҙе борсоған, уйландырған мөһим мәсьәләләрҙе аңлатырға, дөрөҫ юл һайларға ярҙам итә. Фотоға төшөрөү – уның тағы бер яратҡан шөғөлө. Ваҡытты туҡтатып, ҡабатланмаҫ миҙгелдәрҙе таныштарына бүләк итергә ярата. Һәр сара фотоларҙа мәктәптең үҙенсәлекле миҙгелдәре булып ғүмерлеккә тарихҡа ҡала.

Шуныһы һөйөнөслө, педагогтар “йондоҙлоғон” артабан да байытыусы, дауам итеүсе йәш быуын да һыр бирмәй. Эльвира (Зөбәйерова) Вәлиева, Альбина Зөбәйерова, Гөлназ менән Гөлшат Миңлеғоловалар, Регина һәм Ирина Әхмәтовалар, Ирина Зөбәйерова, Гүзәл Рамазанова һәм башҡалар бөгөн киләсәк өсөн яуаплы. Бер нәҫел педагогтарының хеҙмәт стажы 500 йылдан ашып китә. Ошо ҡиммәтле, йылдар менән һыналған “сылбырҙың” өҙөлмәүенә, тағы ла тотороҡлораҡ, ышаныслыраҡ була барыуына бик тә ышанғы килә.

podpiska.pochta.ru



## 4800 эшсе кәрәк!

Сентябрҙә уртаса эш хаҡы 122 мең һум булған

Өфө моторҙар эшләү берекмәһенә 4800 эшсе талап ителә. Предприятие 2028 йылға тиклем заказдар менән тәьмин ителгән, шуға күрә коллективҡа тәжрибәле кешеләрҙе лә, тәжрибәһе булмағандарҙы ла ҡабул итәләр. Үҙҙәренең үҙәктәрендә уҡытып аласаҡтар. Премиялар күп, социаль пакет һәйбәт. “Тулланыуҙың 80 процентҡа тиклемен түләйбеҙ, корпоратив транспорт эш урынына бушҡа килтерә. Торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү буйынса төрлө саралар ғәмәлдә. Беҙ хатта 27 ҡатлы күп фатирлы йорт төҙөргә ҡарар иттек”, – ти етәкселек.

# Бал ҡорттары кеүек егәрлеләр

Тәүелбаевтарҙың уңғанлығы, бөтмөрлөгө хайран итте

✍ Мәрйәм ИМАНҒОЛОВА

Хәйбулла районы

**Бүребайҙан Гөлсинә һәм Әхмәҙи Тәүелбаевтар ғаиләһе менән осрашҡанда, дүрт бала тәрбиәләгән ғаиләнең бер көнө менән ҡыҙыҡһындым, сөнки мал-тыуарын да ҡараған, ҡош-ҡортто күпләп аҫраған, баҡсала йәшелсә, еләк-емешен эшкәртергә өлгөргән, ике ҡатлы йорт һәм ихатаһы ялтырап торған ауыл уңғандарының нисек ваҡыт табыуы ҡыҙыҡһындырҙы. Гөлсинә Шәмсүн ҡыҙы – Татырүҙәк мәктәбендә башланғыс кластар уҡытыусыһы, Әхмәҙи Әүхәҙи улы иһә Бүребай тау комбинатында электрик булып эшләй.**

– Көн дә иртәнге сәғәт алтыла аяғөҫтө булабыҙ. Беребеҙ торғанда, икенсебеҙ йоҡлап ята торған ғәҙәт юҡ. Йәһәтләп һыйырҙарҙы һауып бөтөүгә, йәмәғәтем малдарҙы көтөүгә ҡыуа. Ошоға тиклем өс һыйыр һауһам, быйыл икәүгә ҡалдырҙыҡ. Артабан сепарат айыртып, аҡты эш итеп, балаларға иртәнге тамаҡ әҙерләйем. Тормош иптәшем был арала түтәлдәргә һыу ҡоя, сүп үләндәрен йолҡа. Баҡса тултырып картуф, помидор, ашҡабаҡ, йәшелсә ултыртабыҙ. Һуған, һарымһаҡ, кәбеҫтәне бер ҡасан да һатып алмайбыҙ. Теплицала иртә яҙҙан ҡыяр, помидорҙар өлгөрә. Йыйған уңышты исраф итмәйбеҙ, 100-120 банка тоҙлап баҙға төшөрәбеҙ. Ҡыш буйына етә. Ҡарағат, ҡурай еләге, алма күп. Быйыл ҡырға еләккә йөрөнөк, 40-лап банка еләк ҡайнатмаһы ла яптым. Һөт ризыҡтары ла әрәм булмай, үҙебеҙҙән артҡан һөт, ҡаймаҡ, майҙы һатыуға сығарам. Йыл да 70-ләп баш ҡош-ҡорт алабыҙ. Быйылғы бройлерҙарҙы күптән таҙартып алдыҡ. Әле төшкә тиклем ҡыяр-помидорҙарҙы банкаға тоҙлап ҡуям, – тип һүҙ башланы Гөлсинә Шәмсүн ҡыҙы.

Ике уңған пар килгәндә, донъя көтөү еңел ул. Урыҫбай ауылы ҡыҙы Гөлсинә менән Ғәлиәхмәт ауылы егете Әхмәҙи Тәүелбаевтар дүрт бала тәрбиәләй. Балаларҙың исемдәре үк был ғаиләнең рухы тураһында һөйләй. Таһир улдары, быйыл туғыҙынсы класты тамамлап, Октябрьский коммуналь-төҙөлөш колледжына уҡырға ингән. Хөсәйендәре һигеҙенсе, ә Исмәғил иһә икенсе класҡа уҡырға барған. Балалар баҡсаһына йөрөгән бәләкәй генә наҙлы ҡыҙыҡай Әминәгә – дүрт йәш. Бәләкәйҙән ата-әсәһенең йүгереп йөрөп донъя көткәнен күреп үҫкән балалар ҙа эшкә йәбешеп ята. Ныҡ тырыштар, яҡшы уҡыйҙар. Таһир менән Хөсәйен – спортсы егеттәр. Икеһе лә Урал аръяғы ярыштарында бокс буйынса призлы урындар яулай. Грамота, миҙалдары бихисап. Икеһе лә спорт түңәрәгенә йөрөй, тренерҙары ла уларҙың һөҙөмтәләренән ҡәнәғәт. Хөсәйен саңғыла шәп йөрөй. Башланғыс класта уҡыған Исмәғил өс йәшенән “Һаумы, һаумы, әкиәт!”, “Урал батыр” эпосын ятлау бәйгеләрендә ҡатнаша. Тағы ла шахмат-шашка уйнарға яраталар. Атайҙары, Әхмәҙи Әүхәҙи улы, дүрт пар саңғы һатып алып, ҡыш күмәкләп шыуырға сығалар. Әле иһә балаларын ҡурайҙа уйнарға өйрәтә башлаған.



Автор фотоһы.

Бына ул татыу һәм уңған Тәүелбаевтар ғаиләһе!

– Беҙҙең ғаиләлә илһөйәрлек, башҡорт телен белеү беренсе урында тора. Өйҙә туған телдә аралашабыҙ. Башҡорт халыҡ әкиәттәрен һөйләп, бишек йырҙарын йырлап, күңелдәренә бәләкәстән туған телгә һөйөү тәрбиәләргә тырыштыҡ. Әле дүрт йәшлек Әминә менән төрлө милли бәйгеләрҙә ҡатнашырға тырышабыҙ, – ти Гөлсинә.

Ике ҡатлы йорт янындағы балалар өсөн уйын майҙансығы, матур беседка, йөтеш кенә теплица күҙгә ташланды. Ҡасандыр Мәскәүҙә төрөк төҙөлөш ойошмаһында эшләп, ошо өлкәлә тәжрибә туплаған Әхмәҙи Тәүелбаевтың ҡулы алтын. Ике ҡатлы йортто ла ул үҙ проекты буйынса эшләй. “Бүребайға күсеп килгәс, тәүге йылдарҙа ваҡытлыса фатирҙа йәшәнек. Үҙәгебеҙгә үткәндер, тормош иптәшем шунда уҡ ике ҡатлы итеп төҙөйөм, балалар ишәйһә лә, иркен булһын, тине. Ғөмүмән, уның ҡулынан килмәгән эше юҡ. Балта эшенән тыш, үҙе электрик, төҙөүсе, техниканы яҡшы белә. Үҙ ҡулдары менән бесән сабырға салғы, тырмалар эшләне. Буш торған арала теплица йәки беседка, башҡа берәй әйбер эшләп, һатырға ла өлгөрә”, – ти хужабикә.

Бал ҡортондай егәрле ғаилә бер урында тик тормай. Күптәнге хыялдарын тормошҡа ашырып, быйыл ике умартанан үҙҙәре өсөн шифалы бал етештерә башлағандар. Әйткәндәй, умартасылыҡ идеяһы оло улдары Таһирҙан башлана. Эшкә әрһеҙ 15 йәшлек егет интернеттан ҡарап өйрәнеп, ҡорттарҙы үҙе тәрбиәләй, айырта. Тәүелбаевтарҙың тағы ла бер шөғөлгә тотоноу ниәте алдарына баҫҡан. Бейә малы һатып алғандар, тиҙҙән ҡолонларға тейеш. Артабан йылҡысылыҡты үрсетеп, ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнергә теләктәре ҙур.

Тәүелбаевтарҙың икеһе лә дин юлында, биш ваҡыт намаҙҙарын ҡалдырмайҙар. Ике оло улдары Таһир менән Хөсәйен дә уларҙан ҡалышмай. Ураҙаны, бәләкәйҙәрҙән тыш, бөтә ғаиләләре менән тоталар. Ауылда үткән дини сараларҙан да ситтә ҡалмайҙар. Йыл да ҡорбан салдырып, мохтаждар менән ит һәм һөт ризыҡтарын да уртаҡлашалар.

– Әхмәҙи менән дингә баҫыуыбыҙға 13 йыл инде. Ауылда ғәрәп теле дәрестәре алып, сертификатлы булдым. Икебеҙ ҙә ғәрәпсә уҡыйбыҙ, улдарыбыҙ ҙа белә. Өйҙә уларға үҙем һабаҡ бирәм. Тормош иптәшем дә Ҡөрьән китабын ғәрәпсә уҡый. Татырүҙәктә йәмле Иман йорто бар. Уны төҙөгәндә Әхмәҙи лә ярҙам итте. Мәсеттә дини дәрестәр даими алып барыла, хатта интерактив таҡта ла бар, – тине Гөлсинә Шәмсүн ҡыҙы.

Тәүелбаевтар бөгөнгө көн менән түгел, киләсәкте уйлап йәшәй. Мәҫәлән, Таһирға Сибай ҡалаһынан фатир, машина алып ҡуйғандар. Исмәғилдең дә ер биләмәһе бар, унда өй төҙөргә ниәтләнәләр. Үҙҙәре эшләп йөрөгән һәм мал көсөнә йәшәгән ғаилә бер ҡасан да кредит алмаған. Шәхси хужалыҡта кәрәкле трактор, еңел машиналары ла хәләл көс менән һатып алынған.

– Көндөҙ ятып торорға ваҡыт юҡ. Бер эште бөтөүгә, икенсеһе күҙгә ташлана. Шулай мәшәҡәттәр менән ваҡытыбыҙ үтә. Баҡсаға сыҡһаң инде, өйгә инеү онотола. Һәр ваҡыт хәрәкәттәбеҙ. Башҡараһы эшкә алдан план ҡороп ҡуябыҙ, шулай еңелерәк. Мәҫәлән, бесәнгә күмәкләп сығабыҙ, улдарыбыҙ нык ярҙам итә. Бергәләгәс, эш тә ырай. Ғаиләмә төрләндереп бешерергә яратам, шуға күрә кулинария һөнәренә оҫталыҡ дәрестәре үттем. Ҡышҡы оҙон кистәрҙә торт кеүек тәмлекәстәр бешереп, һатыуға сығарырға теләйем, – ти Гөлсинә.

Йәшәй бит ауыл ерендә бына тигән шәп ғаиләләр тигән уй-ҡыуаныс менән ҡайтырға сыҡтым Тәүелбаевтар йортонан. Бал ҡортондай егәрле, инсафлы, сәмселдәр. Күҙ теймәһен үҙҙәренә.

# Бар яҡлап та бәхетле ул

✍ Кәримә УСМАНОВА

Йылайыр районы

**Ауыл ерендә ҡатын-ҡыҙға донъя көтөү еңелдән түгел. Барыһына ла өлгөрөргә кәрәк уға: ғаилә тормошон да матур итеп алып барырға, эшендә лә алдынғылыҡты бирмәҫкә, йәмәғәт тормошонда ла ҡайнап йәшәргә. Ошо сифаттарға эйә гүзәл заттар арабыҙҙа һирәк осраһа ла, бар әле! Сәкинә Аҡҡужинаны ла тап шундайҙар рәтенә индерергә мөмкин.**



Автор фотоһы.

Йылайыр районының Йомағужа ауылында тыуып үҫкән ҡыҙ, Магнитогорск педагогия училищеһын тамамлап, хеҙмәт юлын үҙенең белем алған мәктәбендә башлай. 1988 йылда ошо ауыл егете Рим Хөснулла улы менән сәстәрен сәскә бәйләй. Тормоштарын йәмләп, ике улдары донъяға килә. Флүр менән Надирҙың икеһенең дә үҙ ғаиләһе бар. Бөгөн Сәкинә Илгиз ҡыҙы – өс ейән-ейәнсәргә яғымлы өләсәй ҙә, килендәренә хәстәрлекле ҡәйнә лә.

Башланғыс кластарҙа белем биргән уҡытыусы ситтән тороп белемен камиллаштыра. 1991 йылда Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Оҙаҡ йылдар башланғыс класта белем биргән уҡытыусы булараҡ, ул балалар психологияһын яҡшы белә, ата-әсәләр менән дә уртаҡ тел таба, шуға күрәлер мәктәп коллективы Сәкинә Аҡҡужинаны социаль педагог булырға тәҡдим итә. Бөгөн ул Йомағужа урта мәктәбендә социаль педагог ҡына түгел, педагог-ойоштороусы булып та эшләй.

Сәләх һәм Һаҡтау ауылы уҡыусылары автобус менән Йомағужаға йөрөп уҡый. Һәр баланың яҙмышы социаль педагогтың күҙ алдында, шуға күрә һәр уҡыусы тураһында бик яҡшы белә. Ата-әсәләр, балалар араһында тығыҙ бәйләнеш булдырылған, ауыр холоҡло уҡыусылар менән шәхсән эш алып барыла.

– Насар бала юҡ ул, әммә бөгөн интернет заманында уҡыусылар менән аралашыу, уртаҡ тел табыу еңелдән түгел. Хатта күптәре үҙҙәренең ата-әсәһе менән дә яҡшылап аралашмай, тиһәк тә була, сөнки хәҙерге заман балаһын бөгөн гаджеттар, телефондағы төрлө юҡ-бар сайттар, видеороликтар тәрбиәләй. Беренсе кластан алып һәр бала менән аралашам, уларҙы нимә ҡыҙыҡһындырғанын белеү өсөн төрлө тест һорауҙары, һөйләшеүҙәр үткәрәм. Ауылда бер-береңде яҡшы белеү, уҡыусыларҙың ата-әсәһен, хатта олатай-өләсәйҙәрен белеү ҙә файҙаға ғына. Бөгөн балаға өйҙә аралашыу етмәй, күп осраҡта йылылыҡ юҡ. Шунан ул ниндәйҙер хәлгә осраһа, күмәкләшеп аптырай башлайбыҙ. Баланы бәләкәйҙән шәхес итеп күрергә өйрәнегеҙ, тип кәңәш бирер инем ата-әсәләргә, – ти Сәкинә Илгиз ҡыҙы.

Бар яҡтан да бәхетле ҡатын һәр баланы ла бәхетле итеп күрергә теләй.

## ЗАМАНДАШ



### Вьетнамға – арпа ярмаһы

Ауыл эшсәндәре продукцияны сит илдәргә һата

Башҡортостанда “Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт” милли проектына ярашлы, “Башҡортостан агросәнәғәт комплексы продукцияһы экспорты” төбәк проекты тормошҡа ашырыла. Төп маҡсат – сит илгә оҙатылған продукцияны арттырыу. Ошо көндәрҙә республиканан беренсе тапҡыр арпа ярмаһы оҙатылды. Миәкә районының бер хужалығынан ул 42 тонна ебәрелде.

# Хеҙмәте менән илен данланы

## Яуаплы вазифала халҡы өсөн хеҙмәт итте

✍ Зөбәржәт ШАҺИЕВА

Ишембай районы

**Яҙмыштары яҡты үрнәк булған, холоҡтарынан кешелеклелек бөркөп торған кешеләр байтаҡ беҙҙә. Ошо көндәрҙә Ишембай районының Кинйәбулат ауылында йәшәүсе Хәйҙәр Хызыр улы Шаһиев 70 йәшлек юбилейын билдәләй. Исеме Башҡортостанға билдәле ауыл хужалығы белгесе ул. 40 йылдан ашыу оло маҡсаттарға, халҡына хеҙмәт итте, ләкин ғүмеренең алтын миҙгелен кисергән Хәйҙәр Хызыр улы талантлы етәксе генә түгел, ә бай тормош юлы үткән абруйлы шәхес тә.**





Фотолар: шәхси архивтан.

Туғандар менән бергә.

Кинйәбулат ауылында Хызыр бабай менән Фатихә инәй ғаиләһендә бишенсе ир бала булып донъяға ауаз һала ул. Бала сағы матур осорға тура килә: Тәйрүк йылғаһының һыуын эсеп, туғайҙарынан еләк-емеш ашап, ауыл малайҙары менән футбол уйнап үҫә. Ер ҡарҙан әрселеү менән тауға менеп, йыуа йыя, аҙаҡ ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, ер еләге өлгөрөргә лә күп ҡалмай. Артабан муйыл ҡарая, балан ҡыҙара, миләш баллана. Йылдың-йылы шулай дауам итә. Көҙ артынан ҡыш килә, яҙҙы йәй баҫтыра. “Ҡыштың һыуыҡ, йәйҙең эҫе, яҙҙың ҡояшлы, көҙҙөң алтын булыуын теләйем. Һәр береһенең үҙенә генә хас матурлығы бар”, – ти уҙаман, хәтирәләргә бирелеп. Ауыл малайына эш тә күп эләгә: йүкәнән һалабаш һыҙыралар, ҡап, септә яһап, промартелгә тапшыралар. Аҡса эшләйем тип, кешеләргә утын да әҙерләп бирәләр.

Атайҙары бик ҡаты тота, ҡаты ғына түгел, ҡайһы саҡ уҫал да була. Шулай итмәйенсә булмағандыр, һигеҙ баланы тыйып тотоп ҡара! Уның ҡарауы, хәҙер шул тәрбиәһе, эшкә өйрәтеп үҫтергәне өсөн атайҙарына ҙур рәхмәтлеләр. Ошондай ауырлыҡтар күреп үҫмәһәләр, ата-әсәһе эшкә өйрәтмәһә, бәлки, ошо дәрәжәгә өлгәшә лә алмаған булырҙар ине.

Кинйәбулат ауылында мәктәпте тамамлағандан һуң, 1969 – 1973 йылдарҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһында ауыл хужалығы техникумында зоотехник һөнәрен үҙләштерә һәм 1973 йылда тыуған ауылы “Ударник” колхозында баш зоотехник булып эш башлай. 1978 – 1981 йылдарҙа Өфөләге ауыл хужалығы институтының агрономия бүлеге студенты була. Студент ваҡыттарында уҡ ойоштороу яғынан оҫта икәнен иҫбатлай, һәр ваҡыт еңеп сығыуға ышанып эш итә. Юғары белемле белгес Стәрлетамаҡ районының “Дружба” колхозына баш агроном булып эшкә ҡайта. Иң таң ҡалдырғаны – уның энергиялы, көслө ихтыярлы булыуы.

**ИЛЕ, ХАЛҠЫ ӨСӨН ЯНЫП ЭШЛӘҮ, ЙӘШӘҮ БАҺАҺЫҘ ҠАЛМАНЫ, ӘЛБИТТӘ. ЭШТӘГЕ УҢЫШТАРЫ ӨСӨН ДУҪЛЫҠ, САЛАУАТ ЮЛАЕВ ОРДЕНДАРЫНА ЛАЙЫҠ БУЛДЫ. ШУЛАЙ УҠ УЛ – БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ҺӘМ РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ АТҠАҘАНҒАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ ХЕҘМӘТКӘРЕ ЛӘ. БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ДӘҮЛӘТ ЙЫЙЫЛЫШЫ – ҠОРОЛТАЙ ДЕПУТАТЫ БУЛЫП ҺАЙЛАНЫУЫ ЛА УНЫҢ ТОРМОШ ЮЛЫН БИҘӘЙ.**

Был эш ауыр, ҡулдан килмәй, тигән һүҙҙәрҙе унан бер ҡасан да ишетмәҫһең. Үҙенә ҡарата нык талапсан булыуы ла – уға хас сифат. 1981 йылда ни бары 28 йәшендә Стәрлетамаҡ районының “Сталь” колхозы рәйесе итеп һайлана, ә 1984 йылда ошо районның Фрунзе исемендәге колхозына етәксе итеп тәғәйенләнә. Бына шулай изге лә, үрнәкле лә, яуаплы ла эштә алмаштырғыһыҙ етәксе булып эшләне. Ул етәкселәрҙең ышанысын аҡланы, халыҡ ихтирамын яуланы. Ул йылдарҙа партия ойошмаһы үтә лә талапсан була. Партия өлкәһендә эшләмәһә лә, ул үҙен белемле, эшлекле, эшен аҙағына тиклем еткерә белгән һөнәр эйәһе итеп күрһәтә алды. Хәйҙәр Хызыр улы, тыуған ауылы Кинйәбулаттың данын күтәреп, абруйлы депутат та булып эшләне. Ғәҙәти колхоздың ғәҙәти рәйесе Хәйҙәр Шаһиев СССР-ҙың Юғары Советы депутаты булып һайланды. Ә 1998 йылда уны ҙур ышаныс менән Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы итеп ҡуялар. Кеше ғүмере ҡыҫҡа булһа ла, халыҡ күңеле мәңгелек. Әле булһа ҡырмыҫҡалылар уны һағына.

Ауырлыҡтары менән дә, һағыштары, шатлыҡтары менән дә хәтерҙә ҡалған ерем – Ҡырмыҫҡалыла эшләгән йылдарым, тип иҫкә ала Хәйҙәр Хызыр улы.

2006 йылда уға тағы ла ҙур өмөттәр бағлап, Стәрлетамаҡ районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләйҙәр. Был йылдарҙа районда ҙур төҙөлөш башлана, колхоздар алдынғылар рәтенә сыға. Былар бөтәһе лә Хәйҙәр Хызыр улының тынғыһыҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәһе, сөнки ул шаршылар нәҫеленән. “Шаршы” таҙа, саф тигәнде аңлата. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел.

Һәр кемдең тыуған яғы үҙенә яҡын, халҡы яғымлы. Ауыл халҡы өсөн Шаһиевтар ҙур мәсет төҙөтә. Мәсетебеҙҙән аҙан тауышы өҙөлмәй.

Хакимиәт башлығы булып эшләү осоронда яңы йорттар төҙөлгән икән, был өлкәлә лә халыҡтың уға рәхмәттәре бихисап. Ул эшләгән дәүерҙәге хакимиәт башлығы менән ялан аяҡлы ауыл малайы – ер менән күктәге йондоҙ араһы. Шағир әйткәнсә, бейеккә йондоҙҙарға менергә кешеләр яҙмышынан арҡан ишмәне ул. Эшләгән урынында ла, йәшәгән ерендә лә кешеләрҙең салт аяҙ күңеленә тутыҡ булып төшмәне. Әйтерһең дә, ул тыуғанда уҡ үҙенең дәрәжәһен белеп донъяға килгән һәм шуны белеп йәшәне.

Иле, халҡы өсөн янып эшләү, йәшәү баһаһыҙ ҡалманы, әлбиттә. Эштәге уңыштары өсөн Дуҫлыҡ, Салауат Юлаев ордендарына лайыҡ булды. Шулай уҡ ул – Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре лә. Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты булып һайланыуы ла уның тормош юлын биҙәй.

Ә инде 2010 йылда Хәйҙәр Хызыр улына Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм районының почетлы гражданы тигән исем бирелде. Рәмилә еңгә менән Хәйҙәр ағайыбыҙ ике ҡыҙ балаға ғүмер бүләк итеп, лайыҡлы тәрбиә бирҙеләр. Белемгә ынтылышлы ғаиләлә үҫкән балалары ла юғалып ҡалманы. Зөһрә – юғары белемле судья. Стәрлетамаҡ ҡалаһында эшләй, тормош иптәше менән бер ул тәрбиәләйҙәр. Венера ике юғары белемгә эйә. Беренсеһе педагогия йүнәлешендә булһа, аҙаҡ Башҡорт дәүләт университетында юридик белем ала. Үҙ яртыһы менән бер ул, ике ҡыҙ тәрбиәләй. Ағайыбыҙ менән еңгәбеҙ – ике ейән менән ике ейәнсәргә олатай менән өләсәй ҙә.

Хәйҙәр Хызыр улы 70 йәшлек юбилейын хаҡлы ялда тыныс күңел менән ҡаршылай. Тынғыһыҙ, тормош өсөн мәңге янып йәшәгән, һүлпәнлекте үҙ итмәгән, хатта алдан күрә белгән кисәге игенсе, ураҡсы һин, Хәйҙәр ағай.

*Эй урҙың һин, урҙың, арттарыңдан*
*Теҙелеп ҡалды тығыҙ игендәр.*
*Һиңә ҡарап һоҡландылар кешеләр,*
*Ошо баҫыу аша уҙһалар.*

Хәйҙәр Хызыр улы – хеҙмәтенә һәйкәл ҡуйырлыҡ, тормош юлынан үрнәк алырлыҡ оло шәхес ул. Һеҙгә ғүмерегеҙгә етерлек һаулыҡ, балаларығыҙға, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙгә һөйөнөп, бәхетле ғүмер кисереүегеҙҙе теләйбеҙ.

podpiska.pechat.ru

## ЙОМА ҠУНАҒЫ



### “Ижади кешеләр” Өфөлә

Йәш быуындың театр фестиваленә рәхим итегеҙ!

Баш ҡалабыҙҙа “Театраль Өфө – Өфө театры” республика балалар һәм йәштәр театрҙары фестивале үтәсәк. “Ижади кешеләр” проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә уҙғарылған сара 30 октябрҙән 1 ноябргә тиклем бара. Фестиваль сиктәрендә Өфө, Салауат, Белорет ҡалаларынан, Бәләбәй, Ҡырмыҫҡалы, Туймазы райондарынан 12 спектакль күрһәтеү планлаштырылған. Фестиваль балалар һәм йәштәр араһында театр сәнғәтен үҫтереү өсөн шарттар булдырыуға, балаларҙа һәм йәштәрҙә мәҙәниәт һәм театр сәнғәте ярҙамында илдең рухиәтенә, тарихи һәм мәҙәни мираҫына һаҡсыл ҡараш булдырыуға йүнәлтелгән.

# Ҡурайсының даны бар

## Ысын мәғәнәһендә остаз ул

✍ Таңсулпан БАЙТИМЕРОВА

**“Ҡурай тотоп, бер ҡасан да арт яғынан өрмәнем”, – тине әңгәмә барышында республикабыҙҙың халыҡ артисы, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, олуғ ҡурайсы Ришат Рәхимов.**
**Ришат Рәшит улы – халҡыбыҙҙың ҡабатланмаҫ шәхесе Ғата Сөләймәновтың ҡурай буйынса беренсе уҡыусыһы, шул иҫәптән беренсе профессиональ ҡурайсы ла ул. Һүҙемдең башына килгәндә, халҡыбыҙҙың милли уйын ҡоралына тоғро, уны өйрәнеүгә, үҫтереүгә бар ғүмерен биреп, лайыҡлы кимәлгә күтәреүгә өлгәшкән ҡурайсы, ысынлап та, хөрмәтле уҡытыусыһынан ваҡытында бик дөрөҫ һәм лайыҡлы тәрбиә ала.**

**– Ришат ағай, Ғата Сөләймәновтың уҡыусыһы булған осороғоҙ һәм уның хеҙмәтен дауам итеүегеҙ һеҙгә тормошта нимә бирҙе? Ошо хаҡта һөйләгеҙ әле...**

– Мин – уның тәүге уҡыусыларының береһе. Ул 1971 йылда Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай класына нигеҙ һалды. Шунан республика ауылдары буйлап уҡырға балалар эҙләп алды. Шул мәлдә ун ике кешене уҡырға алғайнылар, ләкин арабыҙҙан өс кеше генә уҡыуын тамамлай алды. Шулай дүртенсе курсҡа еткәс, мине саҡырып алды ла: “Кустым, инде үҙеңә лә йәштәрҙе уҡыта башларға, уларҙы ҡурай серҙәренә өйрәтергә ваҡыт”, – тине. Уҡытып ҡарағаным да, тәжрибәм дә юҡ, ҡурҡып ҡалдым, әлбиттә. Ә ул миңә: “Мин профессиональ ҡурайсы түгел, ә вокалист, бына һеҙ – профессиональ ҡурайсы, мотлаҡ үҙегеҙ эшләргә тейешһегеҙ”, – тип ҡатыраҡ итеп әйтте.

Һүҙен йыҡманым, шул ваҡыттан алып пенсияға сыҡҡансы, йәғни ҡырҡ йылға яҡын, ҡурайҙан уҡыттым. Бөгөн уҡыусыларым, йәнә уларҙың да уҡыусылары республикабыҙҙа ҡурай сәнғәтендә уңышлы эшләп йөрөй, уларҙы лайыҡлы, дәрәжәле ҡурайсылар тип хаҡлы рәүештә әйтә алам. Йәнә шуны ла билдәләргә кәрәк: беҙҙең ҡурай тажы республика әләмендә һүрәтләнгән икән, тимәк, ул – беҙҙең ҡурайсыларҙың ҡаҙанышы. Ваҡытында төпкөл ауылдарҙан балаларҙы йыйып килтереп, ҡурайҙы профессиональ кимәлдә уҡытыуға өлгәштек, уның статусын да, милләттең төп символы итеп тә күтәрә алдыҡ, шуныһы – ғорурлыҡ.

**– Һеҙ – беренсе профессиональ ҡурайсы һәм шул юҫыҡта күп кенә хеҙмәттәр башҡарған шәхес. Сәнғәт училищеһында Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары бүлеген асыуға нимә этәрҙе ? Ул ваҡытта бит ошондай бүлек бер ҡайҙа ла булмаған...**

– Училищены тамамлағас, юғары белем алғым килде, ул ваҡытта Өфө дәүләт сәнғәт институтында ҡурай класы юҡ ине, шуға ла Башҡорт дәүләт университетында булһа ла уҡып, юғары белем алырға булдым. Бер ваҡыт контроль эш мәлендә уҡытыусым Әхмәт Сөләйманов реферат яҙырға тема бирҙе: “Урал батыр” эпосынан һәм башҡа эпос-ҡобайырҙарҙан музыкаға ҡағылышлы һүҙҙәр һәм музыка уйын ҡоралдары тураһында мәғлүмәттәр табып яҙырға. Шул эште башҡарғанда борон халҡыбыҙҙың ҡурайҙан башҡа, тағы думбыра, ҡыл-ҡумыҙ, ҡумыҙ, дөңгөр, башҡа һуҡма уйын ҡоралдары булғанын белеп ҡалдым. Думбырабыҙ барлығын белә инем, әлбиттә, тик тотоп, уйнап ҡарағаным юҡ ине. Аптырауға ҡалдым: ни өсөн беҙ ҡурайға ғына уҡытабыҙ һуң әле, ниңә думбыра, ҡыл-ҡумыҙҙа уйнатмайбыҙ икән? Йәй буйы ошо турала уйланып сыҡтым да, көҙгә яҡташым, шул осорҙағы мәҙәниәт министры Салауат Әминевкә килдем. Ыңғай ҡараны фекеремә: “Әйҙә, ҡустым, Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары бүлеген асайыҡ”, – тип дәртләнеп китте. Шулай итеп, ҡурай класын киңәйтеп, бүлек асып ебәрҙек.

Үҙемдең һөнәр буйынса программам бар ине бит инде. Йәй тағы өҫтәмә рәүештә ҡыл-ҡумыҙ, думбыра кластарына балалар йыйҙыҡ. Баян класын да ойошторҙоҡ. Уға тиклем ҡурайҙан яңғыҙ ғына уҡыта инем. Бүлек асҡас, һикһәнгә яҡын студент булып китте. Студенттарым Дамир Әбүбәкиров менән Таһир Хәмитовты ла ҡурайҙан уҡытыуға йәлеп иттем. Башҡа белгестәрҙе лә саҡырҙыҡ. Тәүге тапҡыр шул мәлдә Башҡорт халыҡ милли уйын ҡоралдары оркестрын да булдырҙыҡ. Ул ваҡытта хәҙерге кеүек түгел, бер милли оркестр ҙа юҡ ине әле. Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары бүлегенең студенттар оркестры иһә башҡорт тарихындағы тәүге оркестр булды. Өфө сәнғәт училищеһының 70 йыллыҡ юбилейына арналған кисәлә тәүге тапҡыр халыҡ алдына сығарҙыҡ. Ошондай үҙенсәлекле ваҡиғаны, думбыра менән ҡыл-ҡумыҙҙы тәүгә күреп, тамашасылар ҙа ғәжәпләнде...



Халҡыбыҙҙың изге мираҫын һаҡлаған һәм үҫтергән Ришат Рәхимов.

*Фото: ҡурайсының шәхси архивынан.*

**– Ә ҡурай бүлегендә профессиональ кимәлдә уҡығандарҙың репертуары ниндәй ине башта?**

– Башҡорт халыҡ көйҙәре иң алдан барҙы, ҡурайсы мотлаҡ белергә тейешле егермеләгән көй булды улар. Шуларҙы белмәһәң, һин ҡурайсы түгелһең. Ете төн уртаһында уятһалар ҙа, биш бармағың кеүек белергә тейешһең. Шунан тыш, сонатина, вариациялар, обработкалар – барыһы ла кәрәк, һәр профессиональ ҡурайсы нотаға ҡарап уйнай алырға тейеш.

Унан һуң, республика ауылдары буйлап йөрөп, һирәк осрай торған йә онотола барған көйҙәрҙе йыйҙым. Каникулға ҡайтҡанда ла ҡайнымдан, башҡа туғандарҙан яҙып алып, үҙем дә өйрәнеп, студенттарым да үҙләштереһен өсөн бүлеп бирә инем. Шулай итеп, күп кенә башҡорт халыҡ йырҙарын һаҡлап алып ҡалдыҡ, ҡайтанан тергеҙҙек.

**– Ә бөгөн боронғо башҡорт халыҡ йырҙары отоп алынамы, уларҙы йыйған ҡурайсылар бармы? Ғөмүмән, һеҙҙең ҡурайсылар йәмғиәтенә, ҡурай сәнғәтенә ҡарата фекерегеҙ нисек?**

– Әлбиттә, ҡурай сәнғәте үҫә, бер урында тормай. Ололар йә студенттар ғына уйнап ҡалмай, бәләкәй балаларға тиклем ҡыҙыҡһынып, өйрәнергә тырышҡандарын күреп ҡыуанам. Һуңғы йылдарҙа өйҙә ултырыуым сәбәпле, Ҡурайсылар союзының эшмәкәрлеген, әлбиттә, бик яҡындан белмәйем. Миңә ҡалһа, бөгөн беҙҙең арала белемле, тәжрибәле ҡурайсыларыбыҙ байтаҡ, улар ошо юҫыҡта күп эшләй ала – китаптарҙан, уҡыу әсбаптарынан башлап шул уҡ онотолоп барған көйҙәрҙе йыйыуға тиклем.

Минеңсә, бөгөн борондан ҡалған көйҙәрҙе табып, студенттарға өйрәтеп, уны үҫтерергә тырышҡандар күренмәй әлегә. Шуға ла ҡурайсыларға теләктәрем шул: борон-борондан беҙҙең ата-бабалар ҡурайҙа уйнаған, остазыбыҙ Ғата Сөләймәнов та, ҡурайсылар профессиональ кимәлдә уйнаһын, тип тырышҡан, шуға ла ҡалған ҡурайсылар ҙа ҡурай сәнғәтенең офоҡтарын киңәйтеп, артабан яңы бейеклектәргә күтәрелһендәр ине, сөнки бейеклектең сиге юҡ.

Элек беҙ кем инек? Беҙгә, ауылдан килгән ҡурайсы малайҙарға, башҡа факультеттың студенттары бармаҡ төртөп көлә торғайны. Ә хәҙер беҙҙең ҡурайсылар ҙур уңыштар яуланы, улар мәктәптә генә түгел, башҡа ойошмаларҙа ла етәкселәр булып эшләй.

**– Ысынлап та, бөгөн ҡурайсылар – милләтебеҙҙең ғорурлығы, хөрмәтле кешеләр. Ә быңдай мәртәбәгә ҡасан өлгәште улар?**

– Училищела уҡыған саҡта республика кимәлендәге барлыҡ концерттарҙа уйнаһаҡ та, беҙҙе әллә ни һанламай торғайнылар. Мортаза Рәхимов Президент булып килгәндән һуң, беҙҙе бөтә сараларға ла махсус саҡыртты, һәммә тантаналарҙа ла ҡатнаштыҡ. Ниндәй генә байрамда уйнамайыҡ, эргәбеҙҙә туҡтап тороп, беҙҙе ихлас тыңлап китә ине! Ҡурай моңон ятатты. Тап ул беҙгә хөрмәт күрһәтеп, халыҡ алдында абруйыбыҙҙы күтәрҙе, тип иҫәпләйем. “Урал” тигән волейбол командаһы уйын башлар алдынан да һәр саҡ беҙҙе саҡырҙылар, уйынды гимн менән аса торғайныҡ.

**– Ә ҡатын-ҡыҙ ҡурайсылар “ҡурайҙың, ир-аттың бәҫен төшөрә” тип уйламайһығыҙмы? Башҡорт халыҡ тарихында бит ҡатын-ҡыҙҙар ҡурайҙы яуҙан һуң, ирҙәр ҡырылып бөткәндә ҡайғынан ғына уйнаған, бәлки бәләкәй малайҙарына еткерергә генә...**

– Ҡатын-ҡыҙ ҡурайҙы ихлас ярата икән, үҙе лә уйнай икән, эргәһендә йөрөгән балаһы ла, барлыҡ мөхит ҡурайға ғашиҡ буласаҡ. Ысын мәғәнәһендә, әсәгә ҡарап, ҡурайҙы яратасаҡтар.

**– Пропаганда яғынан әйтәһегеҙме?**

– Эйе, үҙенсәлекле пропаганда кеүек килеп сыға ул. Әсәй кеше ҡурайҙа оҫта уйнаймы, һәләте бармы – уныһы икенсе мәсьәлә, әгәр ул ҡурайҙы ярата икән, балаларына ла һеңдерәсәк. Әлбиттә, бөтәгеҙ ҙә эшегеҙҙе ташлап ҡурайҙа уйнағыҙ, тигән һүҙ түгел был. Элек комбайнеры ла, етәксеһе лә, табибы ла ҡурай уйнаған, ул ваҡытта ҡурайсы тигән һөнәр булмаған бит инде. Шуның һымаҡ, хәҙер ҙә ҡатын-ҡыҙ ҡурай менән мауыға икән, тимәк, ҡурайыбыҙ йәшәйәсәк.

**– Элекке ҡурайсылар сәхнәлә ниндәй генә көй уйнаһа ла, ҡурайҙарын баштүбән әйләндереп, торна булып ҡысҡырта торғайнылармы?**

– Уҡытыусым миңә: “Бер ҡасан да ҡурайҙың артынан өрмәгеҙ!” – тип берҙе генә әйтте. Аңланым, бер ҡасан да улай эшләмәнем. Әҙәп, әхлаҡ яғынан да улай булырға тейеш түгел. Ҡурайҙа оҙаҡ ҡына уйнап торғандан һуң, уның эсенә өргән тының, һыу тамсыларына әйләнеп, аҫҡа тәгәрәп төшә башлай, ә һин нисек инде шуны ауыҙыңа ҡабаһың?! Матур күренеш түгел был. Флейтала йә башҡа уйын ҡоралдарында уйнаған музыканттар бер ҡасан да “кешегә оҡшарға тырышам, һәләтемде нығыраҡ күрһәтәйем әле” тип, уйын ҡоралдарының арт яғынан өрөп, шоу яһап йөрөмәй. Йәштәргә ҡарайым да, юғары уҡыу йортон бөткәндәр, мәҙәниәтле үҙҙәре, ниңә улай артыҡ мауығып китәләр икән, тип уйлап ҡуям. Әлбиттә, ҡош тауышы сығарырға кәрәк булһа, мөмкиндер ҙә, әммә башҡа төрлө көйҙәрҙе уйнап торғанда, артығын ҡыландырырға кәрәкмәйҙер!

**– Үткәндәргә байҡау яһағанда, теләгегеҙ тормошҡа ашты тип иҫәпләйһегеҙме, тамамланмай ҡалған эштәрегеҙ ҡалмағанмы?**

– Әлбиттә, теләгем тормошҡа ашты. Үҙемдән һуң хеҙмәтебеҙҙе дауам итерлек ҡурайсылар тәрбиәләп ҡалдыра алдым, улар бөгөн лайыҡлы эшләп йөрөй, аяҡтарында ныҡ баҫып тора. Ҡурайсылар йылдан-йыл көслөрәк була бара, артабан үҫешәләр. Уҡырға килгән генә саҡта алда нимә булырын күҙ алдына ла килтерә алмай инем. Уҡый, эшләй торғас, тормош тәжрибәһе тупланым, башта уҡыта белмәйем тиһәм дә, дәрестәр бирә башланым, шунан китаптары ла кәрәк булды, уныһын баҫтырып сығарҙым, шундай эштәрҙе даими һәм үҙ ваҡытында башҡара алдым. Әммә һәр эштең үҙ осоро була, башланым, эшләнем һәм ваҡытында һөҙөмтә сығарып, матур итеп эшемдән киттем, мин башлаған эштәрҙе дауам итерлек студенттарым ҡалды.

***

Эйе, шәкерттәре үҙен уҙып киткән уҡытыусы ғына ысын остаз була алалыр. Халҡыбыҙҙың үҙенсәлекле уйын ҡоралын бейеклектәргә күтәргән студенттары үҙенә рәхмәтле булған осраҡта ғына педагог бәхетлелер. Заманында профессиональ ҡурай сәнғәтен үҙ ҡулығыҙға алыуығыҙ, ауырлыҡтарға бирешмәй, һынмай, уны һаҡлап ҡалыуығыҙ, милләтебеҙҙең асылы итеп, юғарыға күтәреп халҡыбыҙға ҡайтарыуығыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә, хөрмәтле ҡурайсы!

МАТБУҒАТ




## Конкурс иғлан ителде

Ул Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр йылына арнала

БР Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы БР Журналистар союзы менән берлектә Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр йылын яктыртыуға арналған конкурс иғлан итте. Конкурсҡа республиканың киң мәғлүмәт сараларында исемле йылды яктыртыу маҡсатында донъя күргән ижади эштәр ҡабул ителә. Улар төрлө жанрҙа – мәҡәлә, репортаж, интервью, очерк һ.б. була ала.

# Халыҡ милли баҫмаларҙы уҡырға теләй

Әммә гәзит-журналдарҙың ваҡытында килмәүе күңелде ҡыра

✍ Гөлдәр ЯҠШЫҒОЛОВА

⟵ 1

### Ҡаҙмаш уҡыусылары һоҡландырҙы

Әбйәлил районының Ҡаҙмаш урта мәктәбе төбәктә уҡыу, спорт, талантлы балалар тәрбиәләү йәһәтенән алдынғыларҙан һанала. Берҙәм һәм тырыш коллективты йәш, маҡсатлы директор Зариф Вәкил улы Атауллин етәкләй. Мәктәп төрлө олимпиада һәм конкурстарҙа еңеү яулаған уҡыусылары, уларға төплө белем һәм лайыҡлы тәрбиә биргән уҡытыусылары менән дан тота. Бында спорт ярыштары гөрләп уҙа, айырыуса саңғы, гер, атыу, теннис кеүек төрҙәр үҫешкән, улар буйынса хатта республика кимәлендә лә лайыҡлы сығыш яһайҙар. Күҙҙәре осҡонланып янып торған ҡыҙҙарҙы һәм егеттәрҙе туплаған бейеү коллективының сығыштарын да тамаша ҡылырға яҙҙы. Тағы ла мәктәп яны участкаһында үҫтереп алынған мул уңышты күреп һоҡландыҡ. Быйыл, мәҫәлән, кәбеҫтәне генә 40 мең һумлыҡ һатҡандар! Бынан тыш, мәктәп ашханаһын экологик йәһәттән таҙа, сифатлы йәшелсә, еләк-емеш менән тәьмин итәләр.



Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай институтында осрашыуҙан күренеш.

Уҡытыусылар һәм уҡыусылар менән осрашыу барышында гәзиттең нисек нәшер ителеүе, йөкмәткеһе, эш үҙенсәлектәре тураһында ҡыҙыҡһындылар. Айырыуса VIII класс уҡыусыһы Динислам Абдуллин төплө, етди һорауҙары менән һоҡландырҙы. “Гәзиттә бөтә темаларҙы ла ирекле яктырта алаһығыҙмы?”, “Халыҡ араһында төрлө фекерҙәр, ҡараштар булған осраҡта журналист ғәҙел баһаны нимәгә таянып бирергә тейеш?” тигән кеүек ҡыйыу ҙа, ҡыҙыҡлы ла һорауҙар бирҙе ул. Динисламға ошо ҡыҙыҡһыныусанлығын юғалтмайынса, төплө белем алып, илебеҙҙең һәм халҡыбыҙҙың лайыҡлы улы булыуын теләп, яҡты, ҙур киләсәк юраныҡ.

Был осрашыуҙы ойоштороуға ҡасандыр ошо мәктәптә белем алған, бөгөн инде төбәктә генә түгел, республикала танылған шәхси эшҡыуар Мәҙинә Ибраһимова ҙур өлөш индерҙе. Ғөмүмән, Мәҙинә Рәсих ҡыҙы ауылдаштарын бер ҡасан да ярҙамынан өҙмәй, төрлө саралар үткәргәндә бағыусы булып сығыш яһай, Ҡаҙмаш мәктәбендә йыл һайын уның призына өҫтәл теннисы буйынса ярыштар үткәрелә.

Ҡаҙмаш мәктәбе “Башҡортостан” гәзитенә яҙылыуҙа йыл һайын һынатмай, быйыл да тотош коллектив менән яҙылырға ҡарар иткәндәр. Хеҙмәттәшлек өсөн рәхмәт әйтеп, киләсәктә лә эштәренең уң булыуын теләп хушлаштыҡ ихлас күңелле ҡаҙмаштар менән.



Әбйәлил районының Ҡаҙмаш мәктәбе уҡыусылары һәм уҡытыусылары менән иҫтәлеккә фото.

### Милли асылға тоғролоҡ һаҡлайҙар

Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы быйыл капиталь ремонттан һуң өр-яңы белем усағына әйләнгән тиһәк тә, һис арттырыу булмаҫ. Лицей тыштан да, эстән дә балҡып тора! Коридорҙар, уҡыу бүлмәләре, спорт залдары, ашхана, китапхана һ.б. – барыһы ла зауыҡ менән яңыртылған.

Был белем усағында ла күптәнге дуҫтарыбыҙ эшләй. Лицей директоры Дилә Урал ҡыҙы Фәтҡуллина, йәш булыуға ҡарамаҫтан, оҫта ойоштороусы, талапсан һәм алдынғы ҡарашлы етәксе булып танылған. Осрашыуҙа Сибай ҡалаһы мәктәптәренең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ла ҡатнашты. Улар араһында гәзитебеҙҙе оҙаҡ йылдар алдырып уҡыған, беҙҙең менән хеҙмәттәшлек иткән тоғро дуҫтарыбыҙҙы күреп ҡыуандыҡ.

– Мин “Әлифба”нан түгел, “Башҡортостан” гәзите ярҙамында хәреф танырға, уҡырға өйрәндем. Үҙемде белә-белгәндән өйөбөҙгә ошо милли баҫма килде һәм ошоғаса унан айырылғаным юҡ. Гәзит-журнал килмәгән өй минең өсөн ҡотһоҙ, нурһыҙ донъя кеүек, – тине мәғариф ветераны, авторыбыҙ Рәсимә Айсыуаҡова үҙенең сығышында.

Оҙаҡ йылдар Башҡорт лицейында эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан Әлмира Кәйекбирҙинаның да сығышы фәһемле булды.

– Беҙ үҫкәндә өйөбөҙҙә уҡыу культы өҫтөнлөк итте. Әсәйемә 87 йәш, ул әле лә ошо матур традицияға тоғролоҡ һаҡлап, бихисап милли баҫманы алдырып уҡый, аҙна һайын “Башҡортостан”, “Йәшлек” гәзиттәрендә баҫылған сканвордтарға яуап ебәреп, бүләктәр ота. Гәзиттәр ваҡытында килмәһә, борсолоп көтә башлай, ҡустыбыҙҙы почта бүлексәһенә ебәрә. Уның өлгөһөндә беҙ ҙә милли матбуғатҡа яҙылабыҙ, уҡыйбыҙ, – тине Әлмира Әмир ҡыҙы.

Лицейҙың китапханасыһы Мәрйәм Әбдрәхмән ҡыҙы Вәлиева матбуғатҡа яҙылыуҙы ойоштороу, туған телдәге баҫмаларҙы киңерәк танытыу йәһәтенән ҙур эш башҡара. Ул оҙаҡ йылдар дауамында Р. Өмөтбаев исемендәге Башҡорт

**Вәдүт ИСХАҠОВ, “Башҡортостан” гәзитенең баш мөхәррире, БР Журналистар союзы рәйесе:**

***– Иң тәүҙә Урал аръяғы төбәгенең ҡунаҡсыл, алсаҡ халҡына рәхмәтемде еткерәм. Осрашыуҙар шул тиклем матур үтте, ихлас аралашыуға ҡоролдо, үҙебеҙҙе борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеүгә өлгәштек. Гәзитебеҙҙең йөкмәткеһе, уға яҙылыу, таратыу йәһәтенән етди фекер-тәҡдимдәр туплаnыҡ. Сетерекле мәсьәләләрҙе етәкселек ҡарамағына еткереп, хәл итеү юлдарын эҙләйәсәкбеҙ. Әлбиттә, эш сәфәренең һөҙөмтәһе булараҡ, гәзитебеҙҙең дуҫтарының артыуына өмөт итәбеҙ.***

podpiska.bashgazeta.ru

МАТБУҒАТ



# Журналистар осрашты

## Лайыҡлыларҙың хеҙмәте билдәләнде

Ейәнсура районында журналистарҙың көньяҡ-көнсығыш берекмәһенең семинары үтте. Белорет, Бөрйән, Әбйәлил, Баймаҡ, Сибай, Хәйбулла, Йылайыр, Ейәнсура журналистары өсөн был онотолмаҫ осрашыу булды. "Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йортоноң генераль директоры вазифаһын башҡарыусы Рәсүл Сәфәрғәлиев предприятиеның эш һөҙөмтәләре менән таныштырҙы, эшендә уңыш ҡаҙанған хеҙмәткәрҙәргә Почет грамотаһы тапшырҙы.



**Баймаҡ районының Иҫке Сибай урта мәктәбендә коллектив һәм ауыл ағинәйҙәре бай күргәҙмә менән ҡаршы алды.**



**Сибай ҡала үҙәк китапханаһы ҡарамағындағы "Ынйылар" ижад клубының "Талир тәңкә" фольклор ансамбле сығыш яһай.**

*Кәримә Усманова фотолары.*



**Сибай институты профессоры, иҡтисад фәндәре докторы Ә.Ә. Барлыбаев – "Башҡортостан" гәзитенең тоғро дуҫы.**

**Алһыу ӘҺЛИУЛЛИНА, баш мөхәррир урынбаҫары:**

***– Рухлы, ихлас халыҡ йәшәй Әбйәлил, Сибай, Баймаҡ яҡтарында. Һүҙ ҡәҙерен беләләр, туған телдең бәҫен, тәмен тойоп йәшәйҙәр, матбуғаттың көсөнә ышаналар. Халыҡ гәзитте даими алдырып уҡый. Осрашыуҙарҙа милли матбуғатыбыҙҙың киләсәге өсөн йәне-тәне менән янған дуҫтарыбыҙҙы күреп һөйөндөк, тос фекере, үҙ һүҙе булған рухлы йәштәребеҙ менән таныштыҡ, башҡорт журналистикаһы тип йән атҡан милләттәштәребеҙҙе таптыҡ. Рухланып, дәртләнеп ҡайттыҡ баш ҡалабыҙға. Тик әлеге лә баяғы ҡайһы бер милләттәштәребеҙҙең "Гәзиткә яҙылыр инек тә… почта эшләмәй бит" тигән һүҙҙәре генә күңелгә ҡаяу булып ҡаҙалды.***

лицейының эшмәкәрлегенә ҡағылышлы гәзит-журналдарҙа баҫылған мәҡәләләрҙе, уҡыусыларҙың һәм уҡытыусыларҙың ташҡа баҫылған яҙмаларын туплап бара. Был тупланмаларҙы лицей йылъяҙмаһын сағылдырған үҙенсәлекле архив тип әйтергә лә мөмкин.

Ошо уҡ көндә Сибай ҡалаһының Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһында ла ихлас аралашыуға ҡоролған осрашыу үтте. Унда башлыса оло быуын гәзит уҡыусылар – ағинәйҙәр, ҡаланың үҙәк китапханаһы филиалдары ҡарамағында эшләп килгән төрлө ижади клуб ағзалары, әүҙем авторҙарыбыҙ ҡатнашты. Сараны үткәреүгә Сибай Үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы директоры Гөлнара Юлай ҡыҙы Иҙрисова, Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы мөдире Рәйсә Закир ҡыҙы Ҡунаева, китапханасылар ҙур өлөш индерҙе. "Миләш" халыҡ вокаль ансамбле, "Таулы ынйылары", "Илһам", "Күңел утрауы", "Ынйылар" ижад клубтарында шөғөлләнгән талантлы апайҙар осрашыуҙы матур сығыштары менән йәмләне.

Был осрашыу барышында ла гәзит-журналдарға яҙылыу, почтаның һүлпән эшләүе тураһында һөйләшеүҙәр булды. Мәҫәлән, Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы башҡорт телендә донъя күргән барлыҡ баҫмаларҙы ла алдыра, әммә беҙ барған көндә, йәғни 17 октябрҙә, матбуғат менән танышыу өсөн тәғәйенләнгән өҫтәлдәге иң "яңы" баҫмалар 8 сентябрҙә сыҡҡандары ине.

– Китапханаға милли матбуғатты уҡыу өсөн генә йөрөгән кешеләр ҙә күп, әммә почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарҙы ваҡытында алып килмәүе ныҡ күңелде ҡыра. Шылтыратһаҡ, бер үк яуап яңғырай: почтальондар юҡ. Был – кисекмәҫтән юғары даирәләрҙә ҡаралып, хәл ителергә тейешле көнүҙәк мәсьәлә, тип уйлайбыҙ, сөнки ошо арҡала матбуғат баҫмалары күпме дуҫтарын юғалта, – тине китапхана хеҙмәткәрҙәре.

## Бында алдынғы йәштәр уҡый

Сәфәребеҙҙең икенсе көнө Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай институтындағы осрашыуҙан башланды. Директор Илдар Сәлихйән улы Хәмитов менән әңгәмә барышында уҡыу йортоноң эш йүнәлештәре, алда торған маҡсаттар һәм бурыстар тураһында белештек. Шуныһы маҡтауға лайыҡ: институт етәкселеге йылдың-йылы милли баҫмаларға яҙылыуҙа әүҙемлек күрһәтә, шул иҫәптән беҙҙең "Башҡортостан" гәзите менән дә тығыҙ хеҙмәттәшлек булдырылған. Сибай институтының матбуғат хеҙмәте етәксеһе Рәүилә Сәфәрғәле ҡыҙы Хәсәнова беҙҙе уҡыу йорто менән яҡындан таныштырып, бындағы үҙенсәлекле барельефтар, шәхестәребеҙ хөрмәтенә ҡуйылған иҫтәлекле таҡтаташтар, бюстар тураһында бай мәғлүмәт бирҙе.

Осрашыуҙа институт коллективынан тыш, Б. Мәмбәтҡолов исемендәге Сибай педагогия колледжы студенттары ла ҡатнашты. Йәштәрҙең күҙҙәренең осҡонланып янып тороуын күреп, уларҙың рухланып шиғырҙар һөйләүен тыңлап ҡыуандыҡ, төплө һорауҙарына яуаптар бирҙек. Уҡытыусылар ҙа теләк-тәҡдимдәрен ихлас еткерҙе. Мәҫәлән, профессор, иҡтисад фәндәре докторы Әҙеһәм Әғзәм улы Барлыбаев бөгөнгө ауылдарҙың проблемалары, асыҡлап әйткәндә, уларҙың "ҡартайыуы", ауыл ерендә эш урындарының кәмеүе, унда иҡтисадты үҫтереү юлдары тураһында фәһемле фекерҙәре менән уртаҡлашты һәм ошо теманың гәзит биттәрендә даими сағылыш табыуын теләне.

## Баймаҡта – талантарға бай яҡта

Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылы мәктәбе беҙҙе йыр-моң, тәмле ҡымыҙ менән ололап, ихлас ҡаршы алды. Ошонда уҡ ауылдың уңған ағинәйҙәре, мәктәптең тырыш хеҙмәткәрҙәре бай күргәҙмәләр ойоштorған ине. Әйткәндәй, әллә ҡайҙан балҡып ултырған өр-яңы белем усағын ауыл халҡы дүрт йылдан ашыу ҙур сабырлыҡ менән көтөп алды. Быға тиклем Иҫке Сибай уҡыусылары күршеләге Сибай ҡалаһына йөрөп уҡырға, уҡытыусылар эшләргә мәжбүр булды. Мәктәп шундай матур, иркен, яҡты, заманса. Белем усағының директоры Сәлих Мөхәтдин улы Рафиҡов өр-яңы йыһаз, эш өсөн кәрәкле бөтә ҡорамал ҡуйылған уҡыу бүлмәләре, ҙур, яҡты спорт залы һәм башҡа биләмәләр менән ихлас таныштырҙы. "Рәхәтләнеп эшләйбеҙ, мәктәбебеҙгә килге килеп кенә тора", – ти уҡытыусылар.

Күргәҙмәләр менән танышҡанда үҙебеҙ өсөн байтаҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәт тупланыҡ. Мәҫәлән, география уҡытыусыһы Мәлифә Шәйәхмәт ҡыҙы Сибаева данлыҡлы Мөжәүир хәҙрәт үҙенең уҡытыу эшмәкәрлегендә ҡулланған география әсбабы менән таныштырҙы. Бер быуаттан ашыу һаҡланған ҡомартҡыны тулҡынланып тотоп ҡараныҡ, олуғ әүлиәнең изге рухын тойғандай булдыҡ.

Иҫке Сибайҙағы осрашыуҙа ауыл хакимиәте башлығы Айнур Мөхтәр улы Сибаевтың, мәктәптең атайҙар ҡоро рәйесе Сибай Сәмиғулла улы Утарбаевтың, мәғариф ветерандарының, гәзитебеҙ авторҙарының ҡатнашыуы мәртәбәле булды. Улар үҙҙәренең теләк-тәҡдимдәрен еткерҙе.

Төштән һуң Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Ғәбдрәшит улы Әминев менән эшлекле осрашыу үтте. Һөйләшеү матбуғатҡа яҙылыу осорондағы хеҙмәттәшлек тураһында барҙы. Әлбиттә, донъяуи мәсьәләләр, мәҫәлән, бөтәбеҙ өсөн дә мөһим булған махсус хәрби операция хаҡында ла фекер алыштыҡ. Фәнис Ғәбдрәшит улы ябай халыҡтың берҙәмлеге, эскерһеҙ ярҙамы тураһында күберәк яҙыуыбыҙҙы һораны. Мәҫәлән, күптән түгел гуманитар ылау туплаһыуын ишетеп, оло йәштәге Баймаҡ инәйе һаҡлыҡҡа тип йыйған 150 мең һум аҡсаһын тотоп килгән! "Был аҡса ундағы балаларға нығыраҡ кәрәк", тип аңлатҡан ул был аҙымын, ә үҙе исем-шәрифен бер ҡайҙа ла күрһәтмәүҙе һораған. Бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә мөмкин, тине хакимиәт башлығы. Әлбиттә, Баймаҡта ла почтаға бәйле проблема күтәрелмәй ҡалманы, сөнки бында ла хәл ҡырҡыу тора. Фәнис Ғәбдрәшит улы, мәсьәләгә ныҡлап тотоноп, берҙәм көс менән уны хәл итергә тейешбеҙ, әлеге ваҡытта гәзит-журнал уҡып ҡына йәшәгән, күпселек яңылыҡты шуларҙан алырға ғәҙәтләнгән оло быуын хаҡында онотоорға ярамай, тине.

Дөйөм алғанда, сәфәребеҙ уң булды. Үҙебеҙ өсөн байтаҡ мәғлүмәт туплап, халыҡ менән ихлас аралашып, уларҙың теләктәрен ишетеп, үҙебеҙҙең маҡсат-бурыстарҙы еткерә алдыҡ. Осрашыу үткәргән коллективтарҙың барыһы ла "Башҡортостан" гәзитенә берҙәм рәүештә яҙылырға вәғәҙә биреп ҡалды. Тимәк, был төбәктәге дуҫтарыбыҙ менән баҫмабыҙ биттәрендә тағы осрашасаҡбыҙ, йәғни улар тураһында яҙасаҡбыҙ әле!

podpiska.pochta.ru

СПОРТ



## Өфө ҡыҙы – беренсе!

Алдынғылыкты бер кемгә лә бирмәне

Баш ҡалабыҙҙан Арина Захарова Сергей Шариков иҫтәлегенә үткәрелгән шпага буйынса ярыштарҙа беренсе урынға сыҡты. Ул финалда Мәскәү өлкәһенән Александра Балашованы 15:11 иҫәбе менән еңде.

# Яңы үрҙәр, оло еңеүҙәр алда әле

Ҡырмыҫҡалылар сәләмәт тормош яҡлы

**Йыл һайын Башҡортостанда спорт өлкәһен финанслау артҡандан-арта. 2018 йылда был маҡсатта 4,4 миллиард һум аҡса бүленгән, быйыл был сумма 8,8 миллиард һум тәшкил итә. Беҙҙә ике миллион кеше даими рәүештә физкультура һәм спорт менән шөғөлләнә. Был – республикалағы халыҡтың 56,1 проценты. Биш йыл элек был һан 42,6 процент тәшкил итә ине.**

Рәсәйҙә спорт ҡоролмалары һаны буйынса ла Башҡортостан, Мәскәүҙән ҡала, алдынғы урындарҙың беренһе – икенсе баҫҡысты – биләй. Ә 2019 йылда милли спорт премияһы йомғаҡтары буйынса республика физкультураны һәм спортты үҫтереү йәһәтенән Рәсәйҙең иң яҡшы төбәге тип танылды.

2010 – 2018 йылдарҙа республикабыҙҙа 1729 спорт объекты сафҡа индерелгән. Һуңғы биш йылда был күрһәткестәр артты һәм 1401 объект тәшкил итте. Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында спорт объекттарының төҙөлөүе һәм яңыртылыуы сәләмәт тормош алып барыусылар һанының артыуына ла булышлыҡ итә. Мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районында 177 спорт ҡоролмаһы бар. Йыл һайын районда 200-ҙән ашыу спорт сараһы үткәрелә. Төбәктә балалар һәм йәштәр араһында зыянлы ғәҙәттәрҙе булдырмауҙың, сәләмәт тормош алып барыуҙың һәр кем өсөн мөһим икәнлеген аңлатыу буйынса етди эш алып барыла. Ә быны өсөн барлыҡ уңайлыҡтар булдырылған. Район үҙәгендә спорт мәктәбе, физкультура-һауыҡтырыу һәм спорт-һауыҡтырыу комплекстары эшләп килә. Бында, балалар һәм үҫмерҙәр менән бер рәттән, ололар ҙа төрлө спорт уйындарына йәлеп ителә. Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте, физкультура һәм спорт бүлегенә Руслан Хәйертдинов етәкселек итә.

– Әле Ҡырмыҫҡалы районында спорттың 20 төрө ныҡлап үҫешә. Беҙҙә бигерәк тә футбол, волейбол, хоккей, лапта менән яратып шөғөлләнәләр. Тағы көрәш, өҫтәл теннисы, тхэквондо менән мауығыусылар күп. Спорттың милли төрҙәре – көрәш, уҡ атыу, ат сабыштары үҫешенә айырым иғтибар бүленә. Йыл һайын һабантуйҙарҙа был спорт төрҙәре буйынса ярыштар үткәрелә. Тағы һыбайлыларыбыҙ "Терра-Башҡортостан" ат спорты турнирында даими ҡатнаша, – тип белдерҙе Руслан Илдус улы.

Ҡырмыҫҡалы ауылындағы балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбенең физкультура-һауыҡтырыу комплексында ГТО (Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер!) комплексы үҙәге уңышлы эшләй. "Сәләмәт быуын – көслө төбәк" республика спорт һәм мәғариф проектын ғәмәлгә индереү буйынса ла бында әүҙем эш алып барыла. Быйыл, был проектҡа ярашлы, Һәүәләй, Ефремкин, Ҡырмыҫҡалы ауылындағы Чугункин исемендәге мәктәптәрҙә һәм Ҡырмыҫҡалы ауылындағы гимназияла спорт-һауыҡтырыу йүнәлешендәге беренсе махсус кластар асылды. Ғөмүмән, проект Ҡырмыҫҡалы районының 12 мәктәбендә тормошҡа ашырыла, 22 башланғыс класс, йәғни 498 уҡыусы, йәлеп ителгән.



Автор фотоһы.

Руслан Хәйертдинов бала сағынан спорт менән дуҫ.

Ҡырмыҫҡалы районының спорт тарихы бай ғына. Йыл һайын төрлө ҡаҙаныштарға өлгәшәләр. Мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районының Олокүл ауылынан Марат Хәсәнов – бик үҙенсәлекле спортсы. Ул биш йәшендә йәрәхәтләнә һәм оҙаҡ йылдар дауалана. XI класты тамамлағандан һуң, егет Өфөләге "Ғәлиә" мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Тап унда Марат пауэрлифтинг менән шөғөлләнә башлай. Беренсе күнекмәнән һуң уҡ ошо спорт төрө оҡшай. "Пауэрлифтинг тураһында урамда осраған кешеләр һөйләгәйне. Шулай итеп, 2012 йылда көтмәгәндә әйтелгән тәҡдим буйынса күнекмәгә барырға ҡарар иттем", – ти ул хәҙер, шул осорҙағы хәлвәҡиғаларҙы иҫкә алып.

Бөгөн Марат Хәсәнов – ошо спорт төрөндә Рәсәйҙең Паралимпия уйындары буйынса йыйылма командаһы лидерҙарының береһе. Ул – спорт мастеры. Яҡын арала егеткә 49 килограмға тиклемге ауырлыҡ үлсәмендә халыҡ-ара класлы спорт мастеры исемен бирәсәктәр. Тағы шуны әйтергә кәрәк, Марат Айрат улы Башҡортостандағы ошо уҡ ауырлыҡ үлсәмендәге спортсыларҙан беренсе булып халыҡ-ара класлы спортсы нормативтарын үтәгән. Ул күп тапҡыр Рәсәй чемпионаттарында көмөш миҙал яулаған. Бынан тыш, Ҡырмыҫҡалы егете – пауэрлифтинг буйынса халыҡ-ара ярыштарҙа көмөш миҙал хужаһы. Ә рейтинг буйынса ул – туғыҙынсы урында. Мараттың ихтыяр көсөнә, тырышлығына таң ҡалырлыҡ!

Ҡырмыҫҡалы районынан тағы Арсен Мкртчян тхэквондо буйынса Бөтә Рәсәй "Рәсәй йәшлеге" ярыштарында икенсе урынды яуланы. Ошо уҡ спорт төрө буйынса Солтан Алакаев, Азамат Ғәҙелшин, Руслан Вәлиев Волга буйы федераль округында үткәрелгән ярштарҙа беренсе урынға лайыҡ булғайны...

Руслан Хәйертдинов ниндәй генә вазифа биләһә лә, ваҡыты ни тиклем тар булһа ла, футболды бер ҙә ташламай, һаман да район командаһында уйнауын дауам итә. Тормошон ул физкультура менән спорттан тыш күҙ алдына килтерә алмай. Руслан Илдус улы бик күп маҡтау ҡағыҙҙарына лайыҡ булған, 2017 йылда уға "Башҡортостан Мәғариф министрлығының футбол буйынса иң яҡшы тренеры" исеме бирелгән. Тап бына ошондай үҙ эшен яратып башҡарғандар ҙур уңыштарға өлгәшә лә инде. Әйткәндәй, беҙҙә тренерҙарға – остаздарға – барлыҡ кимәлдә ярҙам итеүҙең комплекслы системаһы булдырылған. Был йәһәттән Башҡортостан – Рәсәйҙә 2020 йылдан "Ауыл тренеры" проекты тормошҡа ашырылған беренсе төбәк. Ул республика райондарына белгестәрҙе йәлеп итеү өсөн барлыҡҡа килгән. Был проект нигеҙендә 104 тренер 600-әр мең һум аҡса алды. Хәҙер был тәжрибә Рәсәйҙең 24 төбәгендә ҡулланыла. 2023 йылдан түләүҙәр 1 миллион һум тәшкил итә. Бынан тыш, спортсыларға һәм уларҙың тренерҙарына өлгәшелгән һөҙөмтәләре өсөн матди дәртләндереү саралары ҡаралған.

Ҡыҙҙар һәм егеттәр спорт менән кинәнеп шөғөлләнһен, маҡсаттарын бойомға ашырһын, тренерҙар тәрбиәләнеүселәрен процесҡа йәлеп итһен һәм һөҙөмтәләр тағы ла яҡшырһын өсөн үҙенсәлекле конкурс та үткәрелә. Быларҙың барыһы ла спорт тармағының үҫешенә булышлыҡ итмәй ҡалмай, әлбиттә. Быйыл 100 йыллыҡ юбилейын билдәләгән Башҡортостан Спорт министрлығының һуңғы осорҙағы ҡаҙаныштары шулай бик тос. Яңынанъяңы үрҙәр, оло еңеүҙәр алда әле, тип ышанабыҙ.

## Һәр баланың хыялы тормошҡа ашһын!

**Башҡортостандың Светлана Хоркина исемендәге Спорт гимнастикаһы үҙәгенең асылыуы һөҙөмтәһендә хәҙер әллә күпме бала яратҡан спорт төрө менән шөғөлләнә.**

Был спорт объекты 2019 йылда төҙөлә башланы. 2018 йылда Өфөнән ете йәшлек гимнаст Дарья Крутько Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашыу ваҡытында дәүләт башлығынан спорт залы өсөн һикереү ҡулайламаһы һораны. Ил етәксеһе ҡыҙҙың хыялын тормошҡа ашырырға һүҙ бирҙе – һөҙөмтәлә яңы спорт объекты төҙөргә ҡарар ителде.

Хәҙер бында уҡыу-күнекмәләрҙән тыш, бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштар уҙғарыла. Тағы 310 урынлыҡ трибуналар менән махсус гимнастика, күнекмәләр, хореография залдары, буфет, медицина кабинеттары, реабилитация залы, душ һәм административ бүлмәләр урынлашҡан. Бинаның дөйөм майҙаны 8,5 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил итә. Үҙәктең айырым инеү урыны булған 30 кешегә иҫәпләнгән дүрт ҡатлы ҡунаҡханаһы ла бар.

Бөгөн республикала спорт гимнастикаһы менән 600-гә яҡын кеше шөғөлләнә, улар менән 30-ға яҡын тренер эшләй.



Фото: Гөлнәзирә Солтанованың шәхси архивынан.

**Гөлнәзирә Солтанова Олимпия уйындары, донъя, Европа һәм Рәсәй чемпионы Светлана Хоркина менән.**

Был үҙәктең асылыуы әллә күпме баланың күңел түрендә йөрөткән уй-хыялын тормошҡа ашырырға булышлыҡ итте. Мәҫәлән, Гөлнәзирә Солтанова бәләкәй сағынан хыялланған художестволы гимнастика менән өс йыл шөғөлләнә. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул, 1-се, 2-се, 3-сө үҫмер разрядтарын тапшырып, быйыл 3-сө ҙурҙар разрядын үтәгән. "Ҡыҙым үҙ теләге һәм күңел ҡушыуы буйынса күнекмәләргә йөрөй. Төрлө гимнастик элементтарҙы интернеттан ҡарап өйрәнде, һуңынан гимнастикаға йөрөү тураһындағы теләген белдерҙе, – ти ҡыҙҙың әсәһе Гөлнара. – Әлбиттә, башта тренерҙар менән һөйләшкәс, улар бик шикләнеп, икеләнеп ҡараны. Шулай ҙа баламдың ҙур теләге, тырышлығы үҙенекен итте. Хәҙер ҡыҙым республика буйынса үткәрелгән ярыштарҙа ҡатнаша".

Гөлнәзирәнең остазы – Айгөл Винер ҡыҙы Абдуллина-Кварец. Ул – юғары категориялы тренер-уҡытыусы, беренсе категориялы судья, Башҡортостандың физик культура һәм спорт буйынса атҡаҙанған хеҙмәткәре. Унық хаҡында тәрбиәләнеүселәре яҡшы һәм талапсан, ти. Ә тренер өсөн һәләтле спортсы – ҙур бәхет. Беҙҙең осраҡта улар икеһе лә бер-береһен тапҡан.

**Махсус битте Айһылыу НИЗАМОВА әҙерләне.**

podpiska.pochta.ru

ХИКӘЙӘ



**Абай бул!**

Хәмер — һаҙлыҡ...

Хәмер — һаҙлыҡ, ҡолас йәйеп көтә беҙҙе,
Тора-бара ихтыярһыҙ итә беҙҙе,
Ул һаҙлыҡҡа йыш ингәндәрҙе күрһәм дә,
Һирәк күрәм унан кире сыҡҡан эҙҙе.
Фәйзи ҒҮМӘРОВ.

# БАЙРАМ

✍ Гүзәлиә БАЛТАБАЕВА
тәржемәһе



Фото: name-scan.ru

**Совет прозаигы, М. Горький исемендәге РСФСР Дәүләт премияһы лауреаты Сергей ВОРОНИНдың бер әҫәрен гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ. 1976 йылда яҙылған хикәйә бөгөн дә йәмғиәтебеҙҙә көнүҙәк булған ауыр проблемаларҙың береһен күтәрә, бәләкәй генә эпизод ярҙамында уйланырға мәжбүр итә.**

Кисен Алевтина Николаевнаға күрше малай йүгереп килде. Ихатала уйнап ултырған балаларға ҡабалан ҡараш ташлай-ташлай, хәбәрен еткерҙе:

– Әсәйем әйтергә ҡушты: һеҙҙең Надька пекарня янындағы канауҙа иҫерек килеш аунап ята, – шулай тигәс, сығып та йүгерҙе.

Алевтина Николаевна, ҡасандыр дәрт-дарманлы, ә хәҙер ибәтәйһеҙ йәйелгән йыуан ҡатын, шунда уҡ юлға ашыҡты. Ирендәре тауышһыҙ ғына нимәләр шыбырланы, тик тиҙҙән тыны ҡыҫыла башлағас, әкренәйергә мәжбүр булды. Артабан ауыр аҙымдар менән, һәр баҫҡан һайын баш эйгәндәй, алға атланы.

Пекарня уның йортонан әллә ни алыҫ та түгел, әммә юл үргә табан булғас, Алевтина Николаевна торған һайын күберәк туҡтаны, ял итеп алырға маташты.

Уның эргәһенән автобустар һәм йөк машиналары үтә торҙо, мопедтар, мотоциклдар тырылданы. Шул саҡ артында арба шаҡылдаған тауыш ишетелде. Алевтина Николаевна ошо тауыштан, гүйә, уянып китте лә, арбаны туҡтатыу өсөн, бар көсөнә ҡулдарын болғай башланы. Ул уны белә. Был, аты кеүек, ярайһы ҡартайған, бәләкәй, әммә әлегә йәнлелеген юғалтмаған осҡор ҡарашлы уҙаман. Ҡарт аҙыҡ-түлек лавкаһына йә икмәк, йә лимонад, йә башҡа төрлө ризыҡ ташый.

– Степан Васильич, – тип өҙләгә-өҙләгә өндәште уға Алевтина Николаевна һәм еңе менән маңлайындағы тирен һыпырҙы, – алып бар әле мине... бынан йыраҡ түгел... пекарняға тиклем...

– Нимәһе бар, әйҙә һуң, ултыр. Йәлме ни... Ниндәй эш менән шул тиклем ҡабаланаһың?

Алевтина Николаевна хәлде һөйләп бирҙе.

– Хөрт, – тип ризаһыҙ башын һелкте Степан Васильич. – Ир эсһә – бәлә, бисә эсһә – бөттө, тигән һүҙ. Ә һин нимә быға юл ҡуяһың?

– Тыңламай бит.

– Хөрт. Ә бөтәһе лә ҡатындарҙы ирҙәргә тиңләгәндән килә. Иман юҡ бит хәҙер, йәштәр гонаһтың нимә икәнен аңламай, бына шуға кирегә тәгәрәй ҙә ул донъя. Ҡайҙа тиклем тәгәрәр – кем белә, – ул дилбегәне тартты ла пекарня яғына боролдо.

Унда канауҙа йөҙө менән ергә ҡапланып Надька, Алевтина Николаевнаның ҡыҙы, ята ине. Бер аяғы ибәтәйһеҙ булып эсенә бөгөлгән, икенсеһе, тулыһынса асылып, оятһыҙ рәүештә ағарып күренә. Алевтина Николаевна тәүҙә ҡулдәгенең итәген рәтләне. Унан, ауыр көрһөнөп, тыны ҡыҫыла-ҡыҫыла, ҡарт менән бергә уны арбаға табан һөйрәттеләр, күтәрергә маташтылар, әммә хәлдәренән килмәне. Шул саҡта Алевтина Николаевна эргәнән үтеп барған, шорты һәм ҡара күҙлек кейгән һаҡаллы ике ир-егеткә мөрәжәғәт итте, әммә улар күҙ ҡырыйы менән генә баҡты ла үтеп китте. Береһе, ҡарсыҡҡа аҡайып ҡарап, бармағын сикәһе эргәһендә борғосланы.

Пекарняның хеҙмәтсәндәре ярҙам итте. Надьканы йәлләй-йәлләй арбаға күтәрешеп һалдылар ҙа, нимәләр гәпләшә-гәпләшә, келәт яғына йүнәлделәр.

Степан Васильич ошондай йөк ташырға мәжбүр булыуына, әлбиттә, ҡәнәғәт түгел ине, мәгәр ҡарсыҡты йәлләне һәм “биш гонаһымды ярлыҡарҙар” тип һөйләнә-һөйләнә, атын тау аҫтына ҡыуҙы.

Надьканы бәләкәй ҡапҡа аша ихатаға индергәнсе, унан йорт эсенә тиклем һөйрәгәнсе байтаҡ хитланырға тура килде. Караватҡа күтәреп торманылар. Шул килеш иҙәндә ятҡанса ҡалдырҙылар, тик әсәһе генә баш аҫтына мендәр тығып, түшәк япты – өшөмәһен типтер инде. Ә аҫтына нимәләр түшәргә көсө етмәне.

Надьканың балалары – игеҙәктәр, беренсе класс уҡыусылары – ирҙәрсә ҡуйы итеп хырылдаған, ауыр йоҡо аралаш нимәләр мығырлаған иҫерек әсәләренә ғазаплы әрнеү менән баҡты.

– Ниңә улай ул? – тип һораны малай.

– Әйттем бит: барыһы ла һеҙҙең атайығыҙ өсөн. Әгәр ташлап китмәһә, был тикле эсмәҫ ине. Ул ғазаплана, ә барыбер аңламай: үҙен дә юҡҡа сығара, беҙгә лә тыныс йәшәргә ирек бирмәй. Эй, Аллаһым, ни өсөн шулай? – Алевтина Николаевна илап ебәрҙе.

Төнөн ул бик оҙаҡ тубыҡланып торҙо, тәҙрә аша йондоҙло ҡара күккә төбәлеп, Аллаһы Тәғәләгә ялбарҙы, ҡыҙын хаҡ юлға баҫтырыуын үтенде, мөхәббәттән һәм мәсхәрәнән булған әрнеүҙәрен баҫырға ярҙам итеүен, балаларҙы йәлләүен һораны. Ул шул тиклем ихлас ялбарҙы, әлбиттә, үҙе белгәнсә, сөнки доғаларҙы күптән онотоп бөткәйне. Таң һыҙылыр саҡта ғына йоҡларға ятты һәм нескә серем тулҡынында онотола ғына башлағайны, кинәт Надьканың йән әсеткес тауышынан тертләп уянып китте. Торҙо, ҡыҙының баш аҫтына мендәр тыҡты һәм Надька тынып ҡалды. Әммә Алевтина Николаевна башҡа йоҡлай алманы. Бер аҙ ятҡас, торҙо ла хужалыҡ мәшәҡәттәренә тотондо. Ә балаларҙы уятырға ваҡыт еткәс, уларҙы торғоҙоп, әсәләре алдына тубыҡландырып ҡуйҙы. Үҙе лә тубыҡланды.

– Уятығыҙ әсәйегеҙҙе, – тине ул.

Балалар бер-береһенә ҡараштылар ла әсәләренең иңбашына ҡыйыуһыҙ ғына төрттө.

– Уятығыҙ, уятығыҙ.

– Әсәй, тор, әсәй...

Надька нимәләр мөңгөрләне лә ҡулдарын һыпырып ташларға маташты.

– Әсәй, әсәй... Әсәй...

Надька ауырлыҡ менән күҙҙәрен асты. Алдында кемдәр торғанын аңламаны. Әммә тора-бара ҡараштары аныҡланды, ҡалҡына биреп ҡуйҙы.

– Нимә эшләүегеҙ был? – тип аптырап һораны.

Шул саҡ Алевтина Николаевна уның аяғына йығылды.

– Аллаһы Тәғәлә менән үтенәбеҙ, эсмә, зинһар, йәллә беҙҙе! – тип ялбарҙы ҡарсыҡ, йәштәренә тығыла-тығыла.

– Әсәй, әсәкәйем... – Балалар уға табан ҡулдарын һуҙҙы.

Ҡыҙы күкрәгенә башын һалды, ә малайы ҡалтыранған тауыш менән ялбарыуын дауам итте:

– Эсмә, әсәй, кәрәкмәй, һөйөклө әсәкәйем...

– Был ни тигән хәл?! – Надька аяҡтары эргәһендә йыуан, сал сәсле ҡарсыҡ ятҡанын, күҙ йәшенә сыланған йөҙҙәре менән уға баҡҡан балаларын күреп, ҡурҡыу ҡатыш ҡысҡырып ебәрҙе. – Был ни тигән хәл?!

Ул ҡарсыҡты күтәрергә маташты, әммә Алевтина Николаевна уның һайын нығыраҡ иҙәнгә һылашты.

– Эсеүемде ташлайым, тип ант бирмәйсә тормайым! Балалар ҙа урындарынан ҡуҙғалмаясаҡ.

– Ташлайым! Ташлайым! Тик тора күрегеҙ! Был ни тигән хәл?! Һуң, әсәй, Ленечка, Катя...

Надька уларҙы ҡосаҡлап алды, эргәләренә тубыҡланды. Бына шулай, дүртәүләп, ҡосаҡлашып, байтаҡ ҡына ултырҙылар, күҙ йәштәренә ирек бирҙеләр, бер-береһенә нимәләр һөйләнеләр. Ҡатын, уларҙы үҙенә ҡыҫып, башҡа ауыҙыма тамсы ла алмайым, тип анттар бирҙе, бынан һуң барыһы ла яҡшы булыр, тип өмөтләндерҙе.

– Һеҙҙең ғүмерегеҙ менән ант итәм, балалар!

– Ах, ҡыҙым, ниндәй ант бирҙең. Һүҙеңдә тормаһаң, тормош бик ҡыйырһытыр үҙҙәрен.

– Юҡ, әсәй, бына күрерһең!

Ошо көндән башлап уларҙың йортонда бөткөһөҙ байрам башланды. Инде ул бер йыл дауам итә. Ҡарсыҡ та көндән-көн тыныслана бара, әммә ҡайһы саҡта, шикләнеп китеп, аш-һыу бүлмәһе тәҙрәһенән урамға, ҡатын-ҡыҙҙарҙың сыр-сыу тауышы сыҡҡан яҡҡа баға. Әммә, Аллаға шөкөр, унда уның ҡыҙы юҡ. Ә Надька көн дә эштән һуң йортона ашыға. Балалар иһә уның ҡаршыһына йүгерә: өләсәйҙәре шулай өйрәткән – әсәйҙе шатланып ҡаршы алырға кәрәк.

– Әсәй килә! Әсәй килә! – тип һөрәнләй улар, унан иһә икеһе ике яҡтан атлай, ә Надька уртала – ҡояштай балҡый, күңелсәк, сағыу.

Байрам бит, йортҡа ысын мәғәнәһендә байрам килде!

podpiska.pochta.ru

## ТӨРЛӨҺӨНӘН



## 60 йыл бергә

Һоҡланғыс парға "Афарин!" тибеҙ

Әлшәй районының Иҫке Аҡҡолай ауылынан Мәрйәм менән Ғәлимулла Зәйҙуллиндар бергә ғүмер итеүҙәренә 60 йыл тулыуҙы билдәләне. Зәйҙуллиндар дүрт бала тәрбиәләп үҫтергән. Хәҙер уларҙың һигеҙ ейәне, биш бүләһе бар. Оло йәштә булһалар ҙа, ҡул ҡаушырып ултырмайҙар. Мәрйәм Ғайсим ҡыҙы бешеренергә, икмәк, бәлеш һалырға ярата. Ошо фотола ла Мәрйәм Зәйҙуллина үҙе бешергән ҡабарып торған тәмле икмәкте тотоп төшкән. Оло йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, йәшәүҙең йәмен тойоп йәшәгән һоҡланғыс парға "Афарин!" тибеҙ.

● ЙҮНСЕЛЛЕК

# Ололарҙы хәстәрләй белә

## Хәйриә сараларынан да ситтә ҡалмай

✍ Г. ӘҮӘЛБАЕВА

**Эшҡыуарлыҡҡа һәр кем үҙ юлы менән килә, шуға күрә улар араһында төрлө һөнәр кешеләре бар.**

Архангел районы үҙәгенән Андрей Алейников та эшҡыуарлыҡҡа тотонғанға ҡәҙәр төҙөүсе булып эшләгән. Урман техникумын, артабан аграр университетты тамамлағас, үҙенең һөнәрен төҙөү эше менән бәйләй. 2005 йылдан үҙ йүнәлешен аса. Тәүҙә "ГАЗель" машинаһы алып, аҙыҡ-түлек менән һатыу итә. Тәүге магазины "Балыҡ" тип атала. Ййлап магазиндарының һаны арта. Ҡатнаш аҙыҡ, аҙыҡ ҡатнашмаһы, аҙыҡ-түлек хатта йыраҡ ауылдарға ла алып барып еткерелә. Үҙҙәренең магазинынан алған тауар районның 71 ауылына бушлай алып барыла. Ололарҙың һорауҙары буйынса ла автолавкалар йөрөп тора.

Бөгөн эшҡыуарҙың биш магазины бар. Бынан тыш, баҙарҙа сауҙа итеүгә биналарҙы ҡуртымға бирә.

Һуңғы йылдарҙа Андрей Александрович төҙөлөш менән дә шөғөлләнә. Бөгөн ул район үҙәгендә баҙар төҙөү хәстәрен күрә, киләсәктә сауҙа нөктәләрен булдырыу ниәте лә бар.

Әйткәндәй, Андрей Алейниковтың тормош юлдашы ла эшҡыуарлыҡта. Ул кер йыуыу порошогы, шампунь кеүек көнкүреш химияһы магазины тота. Эшҡыуарлыҡтың быуындан-быуынға күсеүе лә һоҡланғыс күренеш. 17 йәшлек улдары Никита ла был эштең бар нескәлектәрен өйрәнә. Атаһының эшен дауам итәсәк ул.



**Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Виктор Пьянов эшҡыуар Андрей Алейников менән яңы баҙарҙы ҡарай.**

– Улым студент булһа ла, эшҡыуарлыҡта ныҡлы ярҙамсы. Киләсәктә улымдың эшемде дауам итеренә ышанам, – ти ул. – Эшҡыуарлыҡта тормош юлдашым менән ҡулға-ҡул тотоноп эшләйбеҙ. Мәрхәмәтлек менән дә шөғөлләнәбеҙ, – ти әңгәмәсем.

Мәрхәмәтлек сараларына килгәндә, улар байтаҡ ҡатнаша. Оло йәштәгеләр көнөнә, һабантуйҙарға, янғындан зыян күреүселәргә ярҙам итәләр. "Атайсал" проекты буйынса шишмәне төҙөкләндереүҙә булышлыҡ иткәндәр.

Буш ваҡытта Андрей Алейников тәбиғәттә ял итергә ярата: балыҡҡа йөрөй, ағас ултырта. Әйткәндәй, "Йәшел Башҡортостан" акцияһында ла ул әүҙем ҡатнаша.

Заман ауырлыҡтарынан ҡурҡмай, эшҡыуарлыҡҡа тотонған, яҡташтарына, йәнтөйәгенә файҙа килтереп йәшәгән ошондай замандаштарыбыҙ – йәмғиәтебеҙҙең ныҡлы таянысы.

Архангел районы.

● БАҠСА

# Уңышты нисек һаҡларға?

✍ Г. СӘЛИХОВА

**Һаҡлауға һала торған йәшелсә, еләк-емеште ҡабығын йәнсетмәй генә тупраҡтан таҙарталар, киптерәләр, серек төшкәнен, зарарланғанын айыралар, шунан елләй торған йәшниктәргә йә һауыттарға тултыралар, әммә был ғына етмәй.**

Аҙмы-күпме ваҡыттан күрер күҙгә сәләмәт йәшелсәлә лә сир таратыусы микроорганизмдар үрсей башлай. Экология йәһәтенән хәүефһеҙ универсаль тәбиғи препарат "АнтиГниль" уңышты мәкерле дошмандан яҡшы һаҡлай. Ул тәбиғи Bacillus subtilis бактерияһы ярҙамында эшләнә. Был бактерия сәләмәт үҫемлектәрҙән алына һәм сәнәғәт ысулы менән үрсетелә. Йәшелсәгә, еләк-емешкә ултыртылғас, ул ауырыҡыс бактерияларҙы эстән юҡ итә башлай. Был бактерия нигеҙендә эшләнгән препараттарҙың ("АнтиГниль", "Фитоспорин-М Золотая Осень") кешегә зыяны юҡ, уларҙы уңышты йыйғанда ҡулланырға һәм артынса уҡ йәшелсәне ашарға мөмкин. Ул йәшелсәне, еләк-емеште һаҡлау мөҙҙәтен оҙайта, тәменә зыян килтермәй.

"Фитоспорин-М Золотая осень" препаратын – йәйҙең икенсе яртыһында, ә "АнтиГниль"де һаҡлауға һалыр алдынан ҡулланалар.

Мөгәрәптәрҙең һәм баҙҙарҙың стеналарын, кәштәләрҙе, тараны уңышты йыйыр алдынан ике-өс аҙна элек "АнтиГниль" йә "Золотая осень" менән эшкәртәләр: 30–60 кв. м майҙанға бер һауыт препарат тотонола.

"ФитоБумага" тип аталған ҡағыҙ ҙа бик файҙалы. Уға химик өҫтәмәләр ҡушылмай, ул кеше өсөн



зарарһыҙ. Составындағы тәбиғи һаҡ бактериялары һәм фитонцидлы үҫемлектәрҙең эфир майҙары йәшелсәне, емеш-еләкте һыуытҡыстарҙа, баҙҙа, йәшниктәрҙә һәм контейнерҙарҙа ҡәҙимгегә ҡарағанда 1,5–2 тапҡырға оҙағыраҡ һаҡлау мөмкинлеген бирә.

"ФитоБумага"ны йәшелсә, еләк-емеш тултыра торған йәшниктең төбөнә түшәп ҡалдыралар һәм өҫтән дә бер ҡат ябып ҡуялар. 5-10 кг продукцияға ни бары ике пластина "ФитоБумага" кәрәк.

Реклама

**Объявление**

**ИНФОРМАЦИОННОЕ ИЗВЕЩЕНИЕ № 02-26/7 от «27» октября 2023 г.**
**о проведении конкурса на право заключения договора на право осуществления деятельности на территории Республики Башкортостан по перемещению транспортных средств на специализированную стоянку, их хранению и возврату**

| | | |
|---|---|---|
| 1. | Наименование организатора конкурса: | государственное казенное учреждение Республики Башкортостан «Центр организации перевозок» (далее - ГКУ РБ «Центр организации перевозок») |
| 2. | Официальный сайт: | https://cop.bashkortostan.ru |
| 3. | Адрес организатора конкурса: | 450015, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Карла Маркса, 35, этаж 1, помещение ГКУ РБ «Центр организации перевозок» |
| 4. | Контактный телефон: | +7 (347) 218-15-52 |
| 5. | Место принятия документов для участия в конкурсе: | 450015, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Карла Маркса, 35, этаж 1, помещение ГКУ РБ «Центр организации перевозок». |
| 6. | Время принятия документов для участия в конкурсе: | Прием заявок осуществляется в рабочие дни с 9:00 до 18:00 часов местного времени (обед с 13-00 до 14-00), в предпраздничные дни до 17:00 часов местного времени. |
| 7. | Дата начала и окончания приема заявок (документов) для участия в конкурсе: | **Дата и время начала срока подачи заявок:** 13 ноября 2023 года в 09:00 часов местного времени **Дата и время окончания срока подачи заявок:** 17 ноября 2023 года в 10:00 часов местного времени. Заявки, поданные позднее установленного срока, не рассматриваются и возвращаются. |
| 8. | Дата, время и место проведения процедуры вскрытия конвертов с документами: | **Вскрытие конвертов состоится:** 17 ноября 2023 года в 11:00 часов местного времени, по адресу: 450015, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Карла Маркса, д.35, этаж 1, помещение ГКУ РБ «Центр организации перевозок». |
| 9. | Дата, время и место проведения заседания конкурсной комиссии для вскрытия конвертов с предложением об уровне тарифов на перемещение и хранение задержанных транспортных средств и подведения итогов конкурса: | **Вскрытие конвертов и подведение итогов состоится:** 15 декабря 2023 года в 10:00 часов местного времени, по адресу: 450015, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. Карла Маркса, д.35, этаж 1, помещение ГКУ РБ «Центр организации перевозок». |
| 10. | **Конкурсные предложения:** | |
| | **№ 1** Осуществление деятельности на **территории муниципального района Зианчуринский район Республики Башкортостан** минимально необходимое количество машиномест для размещения задержанных автотранспортных средств на стоянках, категории В - 10 единиц, категории С – 1 единицы, крупногабаритные – 5 единиц; минимально необходимое количество эвакуаторов категории А и В, массой до 3,5 тонн - 1 единицы, категории C, D, E, массой более 3,5 тонн – 1 единица, для перемещения негабаритных транспортных средств -1 единица. | |
| | **№ 2** Осуществление деятельности на **территории муниципального района Нуримановский район Республики Башкортостан** минимально необходимое количество машиномест для размещения задержанных автотранспортных средств на стоянках, категории В - 10 единиц, категории С – 1 единица, крупногабаритные – 5 единиц; минимально необходимое количество эвакуаторов категории А и В, массой до 3,5 тонн - 1 единица, категории C, D, E, массой более 3,5 тонн – 1 единица, для перемещения негабаритных транспортных средств -1 единица. | |
| | **№ 3** Осуществление деятельности на **территории муниципального района Архангельский район Республики Башкортостан** минимально необходимое количество машиномест для размещения задержанных автотранспортных средств на стоянках, категории В - 20 единиц, категории С – 3 единица, крупногабаритные – 15 единиц; минимально необходимое количество эвакуаторов категории А и В, массой до 3,5 тонн - 1 единица, категории C, D, E, массой более 3,5 тонн – 1 единица, для перемещения негабаритных транспортных средств -1 единица. | |
| | **№ 4** Осуществление деятельности на **территории муниципального района Кармаскалинский район Республики Башкортостан** минимально необходимое количество машиномест для размещения задержанных автотранспортных средств на стоянках, категории В - 15 единиц, категории С – 2 единица, крупногабаритные – 7 единиц; минимально необходимое количество эвакуаторов категории А и В, массой до 3,5 тонн - 1 единица, категории C, D, E, массой более 3,5 тонн – 1 единица, для перемещения негабаритных транспортных средств -1 единица. | |
| 11. | Информацию о базовом уровне тарифов на перемещение и хранение задержанного транспортного средства | Базовый уровень тарифа на перемещение задержанного транспортного средства (с учетом погрузочно-разгрузочных работ) с места задержания до специализированной стоянки на территории Республики Башкортостан составляет 2135,77 рублей. В соответствии с приказом Гостранса РБ от 19.04.2017 № 01-05/82 «Об установлении базового уровня тарифов на перемещение и хранение задержанных транспортных средств, а также срока оплаты перемещения и хранения задержанных транспортных средств на территории Республики Башкортостан». |
| 12. | Форма договора | В соответствии с приложением № 3 приказа Государственного комитета Республики Башкортостан по транспорту и дорожному хозяйству от 22 мая 2018 г. № 01-05/83 «Об организации конкурсного производства на право заключения договора на право осуществления деятельности на территории Республики Башкортостан по перемещению транспортных средств на специализированную стоянку, их хранению и возврату» |
| 13. | Срок, предусмотренный для заключения договора после подведения итогов конкурса: | Договор заключается не позднее 20 дней со дня подписания протокола об итогах конкурса. |
| 14. | Срок действия договора | Договор заключается сроком на 3 года |
| 15. | Иные условия проведения конкурса | Участники оформляют заявки и документы в соответствии с требованиями: - постановления Правительства Республики Башкортостан от 19.07.2013 г. № 325 «Об утверждении Порядка квалификационного отбора специализированных организаций, осуществляющих перемещение и хранение задержанных транспортных средств на специализированных стоянках, и Требований к составу действий, работ и услуг, обязательных для выполнения специализированными организациями при осуществлении деятельности по перемещению и хранению задержанных транспортных средств на специализированных стоянках» (с изменениями от 23.12.2021г. № 705); - приказа Государственного комитета Республики Башкортостан по транспорту и дорожному хозяйству от 22.05.2018 г. № 01-05/83 «Об организации конкурсного производства на право заключения договора на право осуществления деятельности на территории Республики Башкортостан по перемещению транспортных средств на специализированную стоянку, их хранению и возврату». |
| 16. | Приложение к информационному извещению: | Приложение № 1 – Согласие на обработку персональных данных; Приложение № 2 - Форма договора |

**Подробная информация и условия проведения конкурса на официальном сайте государственного казенного учреждения Республики Башкортостан «Центр организации перевозок» https://cop.bashkortostan.ru**

Реклама

## ИҒЛАН

Бурыстарығыҙҙы һәм стресты онотоғоҙ! Беҙ һеҙгә финанс азатлыҡҡа өлгәшергә ярҙам итәсәкбеҙ. Компания, һеҙ бурыстарҙан ҡотолоп, яңы тормош башлаһын өсөн, законлы һәм һөҙөмтәле банкротлыҡ процедураһын тәҡдим итә.

Беҙ процестың һәр этабында хоҡуҡтарығыҙҙы яҡлауҙы һәм оҙатыуҙы гарантиялайбыҙ. Һеҙ йәнә финанс йөкләмәләренән азат булыуығыҙҙы тойоп, иғтибарығыҙҙы маҡсаттарығыҙға һәм хыялдарығыҙға йүнәлтә алаһығыҙ.

Финанс азатлығын кисектермәгеҙ! Беҙгә бушлай профессиональ консультация һәм банкротлыҡ процедураһы тураһында аңлайышлы мәғлүмәт алыу өсөн мөрәжәғәт итегеҙ. Беҙ шулай уҡ бөтә кәрәкле документтарҙы рәсмиләштерергә ярҙам итәсәкбеҙ.

**Телефон: +7 (927) 920-02-03. Сайт: банкротство-легко.рф**

Реклама

## СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!



### Яҡташыбыҙ – еңеүсе!

Студент бер миллион һум аҡса аласаҡ

Башҡортостан дәүләт медицина университетының стоматология факультеты студенты Валерий Гаврилин Бөтә Рәсәй “Студент стартапы” конкурсында еңеп сыҡты. Уның проекты яман шеште диагностикалау өсөн мобиль ҡушымта эшләүҙе күҙ уңында тота.

# Ғүмерҙәрҙе ҡыйыусы сирҙе нисек еңергә?

## Даими тикшерелеү мотлаҡ

**Рәсәйҙә һөт биҙе яман шеше сиренә ҡаршы көрәш аҙналығы тамамланды, әммә проблема шул көйөнсә ҡала. Яман шештең был төрө – донъяла киң таралған онкология сирҙәренең береһе. Шуныһын да белеү мөһим: ир-ат та был сиргә дусар, уларға сама менән бөтә асыҡланған яман шеш осраҡтарының бер проценты тура килә. Кемдәр хәүеф төркөмөнә ҡарай? Ауырыуҙы нисек иҫкәртергә?**

### 40 йәштән һуң – ике йыл һайын...

**Республика клиник онкология диспансерының маммология бүлексәһе мөдире, медицина фәндәре докторы, юғары категориялы онколог Марат Ғәлиев ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап бирҙе.**

**– Башҡортостанда һөт биҙе яман шеше онкология сирҙәре араһында нисәнсе урында?**

– Бына ун йыл инде республикала онкология сирҙәренең дөйөм структураһында ул беренсе урынды тота. Сирле 110-120 ҡатын-ҡыҙға һөт биҙе яман шешенә дусар бер ир тура килә. Йылына һөт биҙе яман шеше диагнозы ҡуйылған 15-16 ир асыҡлана.

**– Былдай сирлеләр араһында үлем осраҡтары күпме?**

– Ярайһы ғына ауыр, агрессив шеш ул. Әммә ваҡытында асыҡланғанда, уны уңышлы дауалап була. Ни тиклем иртәрәк асыҡланһа, һауығыуға ышаныс та ҙурыраҡ була. Әгәр шеш беренсе-икенсе стадияла асыҡланһа, пациенттарҙың 90-95 проценты иҫән ҡаласағына өмөт бар. Өсөнсө стадияла 45 проценты һауыға, ә дүртенсе стадияла диагноз ҡуйылғандан һуң биш йылға тиклем йәшәүселәр бик аҙ.

**– Һәр ваҡытта ла шеште ҡул менән ҡапшап ҡарап асыҡлау мөмкинме?**

– Йыш ҡына төйөрҙәр һөт биҙе туҡымаһында тәрән урынлаша, шуға күрә уларҙы ҡапшап ҡына тойоу мөмкин түгел. Беҙ ҡатын-ҡыҙҙарға даими рәүештә маммография үтергә тәҡдим итәбеҙ, ул – һөҙөмтәле тикшереү төрө. Ҡырҡ йәштән һуң уны ике йыл һайын үтеп торорға кәрәк.

Ҡырҡ йәшкә тиклемге ҡатындар йыл һайын ультратауыш тикшереүе үтергә тейеш, был ҡоралмала хатта миллиметр ҙурлығындағы үҙгәрештәр ҙә күренә. Уларға маммография үтергә тәҡдим итмәйбеҙ, сөнки уларҙың ағзаһындағы туҡыма бик тығыҙ, процедураның тәьҫирһеҙ булыуы ихтимал.



Фото: Һаулыҡ һаҡлау министрлығы.

Марат Ғәлиев.

### Алһыу таҫма – сиргә ҡаршы көрәш билдәһе

Һөт биҙе яман шеше – Рәсәйҙә генә түгел, бөтә донъяла киң таралған онкология сирҙәренең береһе. Хатта, һирәк булһа ла, ирҙәр ҙә сирҙең ошо төрөнә дусар була. Оҙаҡ ваҡыт эстроген гормоны ҡабул иткән, бала тапмаған ҡатын-ҡыҙҙар, күремдәре иртә башланған йәки климакс осоро һуң тамамланған аҫыл зат вәкилдәре хәүеф төркөмөнә инә. Шулай уҡ артыҡ тән ауырлығы, зарарлы ғәҙәттәр, гинекология сирҙәре, имгәнеүҙәр ошо насар сиргә килтереүе ихтимал.

Һөт биҙе шештәренең теге йәки был формалары (утыҙҙан ашыу төрө бар) аҫыл заттың яртыһында осрауы мөмкин (30 йәштән өлкән һәр икенсе ҡатын-ҡыҙҙа). Бәхеткә күрә, уларҙың күпселеге сәләмәтлеккә зыян килтермәй.

Һөт биҙе яман шеше – ғәҙәттә, ауыртыуһыҙ, бары бармаҡтар менән тотоп, тикшереп ҡарағанда һиҙелә. Башҡа үҙгәрештәр булыуы ла ихтимал, мәҫәлән, һөт биҙе ҙурлығы, тиреһе үҙгәреүе (бөрөшөүе, ҡыҙарыуы, “йәмшәйеүе”, сабыртмалар сығыуы һ.б.), һөт биҙе урынында йәки ҡултыҡ аҫтында шешенеү һәм эҙлекһеҙ ауыртыу тойолоуы.

Һөт биҙе яман шешенә килтергән төп сәбәптәрҙе ҡарайыҡ:

- яҡын туғандарҙа яман шеш асыҡланыуы (әсәйендә, ҡыҙында, бер туған һеңлеһендә йәки апайында); күремдең иртә башланыуы (12 йәшкә тиклем) һәм һуң тамамланыуы (50 йәштән һуң);
- күрем тамамланыуы; бала тапмау, тәүге йөклеләктең һуң булыуы (30 йәштән һуң); артыҡ тән ауырлығы; алкоголь менән мауығыу.

Хәүеф факторҙарының булыуы ҡатын-ҡыҙҙы һиҫкәндерергә һәм тикшереү үтергә кәрәклеген иҫкә төшөрөргә тейеш. Һөт биҙҙәрен даими рәүештә тикшереү мотлаҡ (күрем тамамланғандан һуң ете-ун көн үткәс). Маммологта булып, консультация алыу, маммография яһатыу, йыл һайын медицина тикшереүе үтеү мөһим.

Һөт биҙе шешен иҫкәртеү бөтә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн дә мотлаҡ булырға тейеш. Сәләмәт тормош менән йәшәү, дөрөҫ туҡланыу, күберәк бала табыу һәм сабыйҙы күкрәк һөтө менән имеҙеү, стрестарҙы һәм конфликтлы хәлдәрҙе урап үтеү, зарарлы ғәҙәттәрҙе үҙ итмәү хәүефле хәлгә юлығыуҙан һаҡлар. Сиргә шик тыуғанда, ваҡытты һуҙмайынса, табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Алһыу таҫма – һөт биҙе шешенә ҡаршы көрәш программаһын яҡлаған ойошма һәм шәхси кешеләрҙең халыҡ-ара символы. Программа дәүләт кимәлендә төрлө ил президенттары, танылған шәхестәр, коммерция һәм йәмәғәт ойошмалары тарафынан хупланған.

### Тикшереү бушлай, барырға онотма!

Маммография – һөт биҙе шештәренең билдәле бөтә төрҙәрен асыҡлауҙа алмаштырғыһыҙ ысул, диагностикалауҙа “алтын стандарт”

ХӨРМӘТЛЕ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР, ҮҘЕГЕҘ ӨСӨН БЕР НИСӘ СӘҒӘТ ВАҠЫТ ТАБЫП, БЕЛГЕСКӘ КҮРЕНЕГЕҘ, ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН АППАРАТТАРЫНДА ТИКШЕРЕҮ ҮТЕГЕҘ. ӘЛЕГЕ КӨНДӘ БЫЛ – БЕРҘӘН-БЕР ЫШАНЫСЛЫ ЫСУЛ.

булып тора. Диспансерлаштырыу тикшереүҙәре исемлегенә маммография индерелгән, уны һәр кем Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса бушлай үтә ала. Ай һайын күрем тамамланғандан һуң үҙ-үҙеңде тикшереп торорға онотмағыҙ, һөт биҙе шеше осраҡтарында үҙеңде диагностикалау бик мөһим тәьҫирле сара, тип иҫәпләй онкологтар. Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар, үҙегеҙ өсөн бер нисә сәғәт ваҡыт табып, белгескә күренегеҙ, хәҙерге заман аппараттарында тикшереү үтегеҙ. Әлеге көндә был – берҙән-бер ышаныслы ысул.

### Яман шеш нимәне яратмай?

Табиптар әйтеүенсә, химия терапияһы бик тиҙ үрсеүсе шеш күҙәнәктәрен үлтерә йәки уларҙың үрсеүен аҡрынайта. Хирургик дауа һәм радиотерапия менән бергә химия терапияһы яҡшы һөҙөмтә бирә.

***

Томаттарҙағы ликопин шешкә ҡаршы тороу үҙенсәлегенә эйә. Ул бик яҡшы антиоксидант булып тора. Һуған, һарымһаҡ, сәтләүек, соя, кишер, ҡабаҡ, кәбеҫтә, йомортҡа, балыҡ, етен орлоғо, кунжут та файҙалы.

***

Зарарлы ғәҙәттәрҙән арыныуҙан тыш, ҡатын-ҡыҙ бюстгалтерҙы дөрөҫ һайларға, балаһын имеҙеп үҫтерергә, нәҫел факторҙары тураһында онотмаҫҡа, спорт менән шөғөлләнергә тейеш, тип иҫәпләй белгестәр.

***

Шештәрҙе иҫкәртеү өсөн уларҙы таркатыусы дарыу үләндәрен ҡулланырға мөмкин. Кесерткән, женьшень, ромашка, шалфей, мәтрүшкә – тап шулар рәтендә.

***

Яман шеште иҫкәртеүҙә Е витамины йәки токоферол ярҙам итеүе билдәле. Ул бик көсләтле тәбиғи антиоксидант, ирекле радикалдарға ҡаршы көрәшә.

***

Донъяла иң киң таралған онкология сире менән 13 – 90 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙар ауырый. Һөт биҙе яман шеше алдынғы илдәрҙә 1970 йылдарҙан һуң көсәйгән.

### Дөрөҫ тын алырға өйрән

**Кеше үҙен һау-сәләмәт тойғанда нисек тын алыуына игтибар ҙа итмәй. Ә дөрөҫ тын алыу – Ер йөҙөндәге тереклектең йәшәүе өсөн төп шарттарҙың береһе. Үпкәнең һәм тын алыу системаһы ағзаларының сәләмәтлеге кеше имменлегенең төп гаранты булып тора. Уларҙың аныҡ, берҙәм эшмәкәрлеге тормош сифатын билдәләй.**

Сирҙәрҙе иҫкәртеү һәм тын алыу системаһының функциональ мөмкинлектәрен яҡшыртыуға иҫкәртеү саралары ярҙам итә. Үпкә көпшәһенең (бронх) обструктив патологияһын иртә осорҙа асыҡлау һәр кем өсөн мөһим. Был ауырыуҙың нигеҙендә ваҡ көпшәләрҙең хроник ялҡынһыныуы һәм тарайыуы ята, үпкә туҡымаһы зарарлана, шешенә, йүтәлләтә, тын ҡысыла, арыу-талсығыу барлыҡҡа килә. Үпкәнең хроник обструктив сире (ҡыҫҡаса уны ХОБЛ тип йөрөтәләр) – бик етди, йылдар дауамында аҙып, ауырыуҙы йонсотоусы, организмда кислород етешмәүе менән барыусы хәүефле ауырыу. Тейешле дауа булмағанда, ул кешене инвалидлыҡҡа йәки үлемгә алып килә.

Сирҙең йыш осраған сәбәптәре араһында тәмәке тартыу ҙур урын алып тора. Тәмәке тартҡанда һулаған төтөн бронхтарҙы һәм үпкә туҡымаһын зарарлай, еҫтәүенә был зыянды кире ҡайтарып булмай. Ни тиклем оҙағыраҡ тартһағыҙ, шунса һаулығығыҙға күберәк зыян килтерәсәкһегеҙ. Зарарлы эш шарттары (шахтерҙар, иретеп йәбештереүселәр, металлургия һәм химия сәнәғәте хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла), көнкүреш шарттарында төтөн еҫкәү, экологик яҡтан имен булмаған шарттарҙа йәшәү шулай уҡ сиргә юлыҡтырыуы ихтимал. Ауырыу башланыуҙың тәүге осоронда ул үҙен һиҙҙермәй, клиник билдәләр, ҡағиҙә булараҡ, оҙайлы ваҡыт тәмәке көйрәткәндәрҙә күҙәтелә башлай.

Был хәүефле сирҙе диагностикалауҙың төп ысулы – спирометрия (тышҡы тын алыу функцияларын тикшереү).Тәүҙә эскә тәрән итеп тын алғандан һуң, аҙаҡ махсус спирометрға нығ итеп, ҙур ҡеүәт менән тынды сығарырға кәрәк. Спирометр менән тоташтырылған компьютер сығарылған һауа күләмен һәм тиҙлеген үлсәйәсәк һәм анализлаясаҡ. Күрһәткестәр норманан тайпылғанда, табип һеҙгә дауа билдәләйәсәк. Былдай тикшеренеүҙәрҙе Сәләмәтлек үҙәктәрендә үтергә мөмкин.

**Махсус битте Динә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

publiska.pochta.ru



## МАТУР ҮТҺЕН ЯЛЫҒЫҘ!

### 81-се һандағы серһүҙ – “һандуғас”

“Ҙ” хәрефе ике һүҙҙә бар ине: Үҙәнбаева, аҙым

Иң тәүге булып дөрөҫ яуапты **Сибайҙан Гөлшат Горшенина** ебәрҙе. Ҡотлайбыҙ! Шулай уҡ Дәүләкәндән Гөлфирә Ғәскәрова, Ишембайҙан Әнисә Һөйәрғолова, Фәимә Вәхитова, Самат Халиҡов, Күгәрсендән Венера Шәйәхмәтова, Йылайырҙан Венера Абдуллина һәм Әминә Лоҡманова, Сибайҙан Ғилман Шәрипов, Архангелдән Зифа Рәшитова, Илештән Ғәлимә Ғәлиева, Хәйбулланан Йәмилә Ғөбәйҙуллина һәм Миәкәнән Мөхәмәтйәновтар ғаиләһенән дә дөрөҫ яуап алдыҡ. Афарин!

# Башҡорт ғалимдары




Г. Яҡшыголова әҙерләне.

## Хөрмәтле гәзит уҡыусылар!

Сканвордтағы түңәрәктәрҙәге хәрефтәрҙән серһүҙ төҙөп, исем-шәрифегеҙҙе, йәшәгән район-ҡалағыҙҙы күрһәтеп, **8-927-932-69-09** телефонына смс-хәбәр ебәрегеҙ. Дөрөҫ яуапты беренсе булып тапҡан кешенең телефонына 100 һум аҡса күсерәбеҙ.

Бөгөнгө сканвордты тулыһынса сисеп бөткәндән һуң нисә һүҙҙә “ғ” хәрефе барлығын һанарға һәм серһүҙгә ҡушып, ошо һанды яҙып ебәрергә кәрәк. Бер шаҡмаҡта ике һүҙҙең “ғ” хәрефе тура килгән осраҡта, һәр һүҙ айырым һанала. Еңеүсе ике шартты ла теүәл үтәүселәр араһынан билдәләнә.

## 81-се һандағы сканвордтың яуаптары

**Горизонталь буйынса:**

Сысҡан. Авиалайнер. Аҙым. Абонент. Карта. Ҡадирова. Ғата. “Ғилмияза”. Бауырһаҡ. Ҡудашева. Зилзилә. Фрахтер. Муса. Лактоза. Егетлек. Гай. Әнис. Емешлек. Клавиатура. Һабаҡташ. Тин. Титр. Быков. Манго. Арҡа. Рәдиф. Шына. Үҙәнбаева. Селлә. Азот.

**Вертикаль буйынса:**

Вәғиз. Суверенитет. Ламбре. Комуз. Тишек. ЛИАЗ. Арбат. Экскаватор. Башаҡ. Әғүәсе. Сталинград. Төрки. Фәнүнә. Нағыш. Ҡыйбат. Артыш. Арба. Ҡаба. Һабын. Румба. Фәлсәфә. “Азамат”. Наиб. Канди. Рерих. Смаҡова. Теолог. Абаға. Аҫҡар. Ағай. Шыма.

## ЙОНДОҘНАМӘ

**30 октябрь – 5 ноябрь**

### ҠУҘЫ

Һеҙҙе бөтә яҡлап та еңел аҙна көтә. Эштә лә, шәхси мөнәсәбәттәрҙә лә барыһы ла көйлө барыр. Аҙна аҙағында әүҙемлегегеҙ артҡанын тойорһоғоҙ. Һаулығығыҙға иғтибар итергә онотмағыҙ, сирләп китеү хәүефе ҙур.

### БУҒА

Аҙна бик матур башланасаҡ. Тик аҙағына ҡарай, әгәр тырышлыҡ һалмаһағыҙ, проблемалар килеп тыуыуы ихтимал. Уйламаған һатып алыуҙарҙан һаҡ булығыҙ. Бының өсөн аҡсағыҙ күп китәсәк, ә шатлыҡ булмаясаҡ. Ғөмүмән, һеҙгә финанс йәһәттән ипле булырға кәрәк.

### ИГЕҘӘКТӘР

Ремонт башламағыҙ. Йә үҙегеҙ йәрәхәттәр аласаҡһығыҙ, йә эшләгән кешеләр проблема килтерәсәк. Бик кәрәк булһа, ике-өс аҙнанан башларға мөмкин. Эштә хеҙмәттәштәр менән арағыҙҙы боҙмағыҙ, һеҙ хаҡлы булһағыҙ ҙа, бөтә коллективҡа ҡаршы тора алмаясаҡһығыҙ.

### ҠЫҪАЛА

Шәхси йәһәттән уңышлы аҙна. Тик нисек кенә теләһәгеҙ ҙә, был турала кешегә һөйләмәгеҙ. Уларҙың һеҙҙең турала дөрөҫ булмаған мәғлүмәт таратыуы ихтимал. Хроник сирҙәре булған кешеләргә һаулығына иғтибарлы булырға кәңәш ителә.

### АРЫҪЛАН

Кәйефегеҙ ҡырылып торор. Әгәр бөтәһе лә насар кеүек тойолһа, элекке уңыштарығыҙ һәм еңеүҙәрегеҙҙе хәтерләгеҙ. Мөмкинлек булһа, элекке дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ менән аралашығыҙ. Был күңел тыныслығы килтерер.

### ҠЫҘ

Эшкә бөтә белемегеҙҙе, тырышлығығыҙҙы һалығыҙ. Һеҙҙе күрәсәктәр, үрләтеүҙәре, эш хаҡын арттырыуҙары ихтимал. Яңғыҙҙар ошо осорҙа парын осрата ала. Ғаиләлеләргә яҡындарына ваҡыт бүлергә кәрәк. Ҡайһы берҙә эш күплеккә һылтанып, онотоп та китәһегеҙ кеүек.

### ҮЛСӘҮ

Дүшәмбе ҙур ғына күләмдә аҡса килеүе бар. Йә бурыс ҡайтарасаҡтар, йә өҫтәмә эш өсөн түләрҙәр. Аҙна аҙағында түрәләр менән аралашыр өсөн уңай мәл, уны ҡулдан ысҡындырмағыҙ. Һаулығығыҙ иғтибар талап итә, берәй нәмә борсоһа дауаханаға барып килегеҙ.

### САЯН

Иғтибарлы булығыҙ. Бер-берегеҙҙе аңламау арҡаһында низағтар тыуыуы бар. Был эшкә лә, шәхси тормошҡа ла ҡағыла. Театр, кино, ресторан кеүек урындарға сығып килегеҙ, унда һеҙҙе һәйбәт танышлыҡтар көтә.

### УҠСЫ

Вазифала үрләү йәһәтенән тәҡдим яһарҙар. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгәндәр отошло килешеү төҙөй ала. Мөһим эште шишәмбегә ҡалдырыу хәйерле. Аҙна аҙағында кәрегеҙ кәмей башлар, шуға ял итеүгә лә ваҡыт ҡалдырығыҙ.

### ЫЛАҠ

Тормоштағы уңышһыҙ яҡтарҙы яҡшыға әйләндерә беләһегеҙ бит. Бының менән файҙаланыр ваҡыт етте. Бошонмағыҙ, барыһы ла һәйбәт буласаҡ. Ғаиләле кешеләр икенсе яртыһына иғтибар итһен ине, улар үҙҙәрен яңғыҙ тоя.

### ҺЫУҒОЯР

Уйҙарығыҙ тормошоғоҙға йоғонто яһағанын беләһегеҙ. Тимәк, тик яҡшы нәмәләр тураһында уйлағыҙ һәм һәйбәткә юрағыҙ. Ҡырҡа үҙгәрештәр булыуы ихтимал. Фатир алырға, йәшәгән урынды йәки эште алмаштырырға була.

### БАЛЫҠ

Һаулығығыҙ иғтибар талап итә. Эйе, эш күп, тик үҙегеҙ тураһында ла онотмағыҙ. Финанс яҡтан уңыш киләсәк, төрлө килешеүҙәр ҙә файҙа килтерәсәк.



# ТЕЛЕВИДЕНИЕ ПРОГРАММАҺЫ

## Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә

### Ноябрь айына һынамыштар

**1 ноябрь** көн йылы булһа, ҡыш йылы килер.
**2 ноябрь** ҡар ҡоро ергә төшһә, ә ағастар япраҡ ҡойоп бөтөрмәгән булһа, ул тиҙҙән иреп бөтә.
**3 ноябрь** йылы булһа, бер аҙна йылы һауа торошо һаҡлана.
**4 ноябрь** ямғыр яуһа, ҡыш иртә килер. Ваҡ ямғыр һибәләһә, һауа торошо боҙолор.
**5 ноябрь** ҡар йәки ямғыр яуһа, өс аҙнанан ҡар ята.

## ДҮШӘМБЕ
30 октябрь

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро" (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00, 03.00 Новости
09.20 "АнтиФейк" (16+)
10.00 "Жить здорово!" (16+)
10.50, 12.15, 17.00, 18.30 "Информационный канал" (16+)
15.15 "Давай поженимся!" (16+)
16.05 "Мужское/Женское" (16+)
19.55 "Куклы наследника Тутти" (16+)
21.00 Время
22.00 Т/с "Бизон: дело манекенщицы" (16+)
23.00 "Большая игра" (16+)
00.00 Подкаст.Лаб "Произвольная программа" (16+)
00.45 Подкаст.Лаб "Мелодии моей жизни" (16+)
01.30 Подкаст.Лаб "Антропология" (16+)
02.15 Подкаст.Лаб "Россия и Запад на качелях истории" (16+)
03.05 Подкаст.Лаб "Легкие деньги" (16+)
03.55 Подкаст.Лаб "Жизнь замечательных" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России"
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.30 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 "60 Минут". Ток-шоу (12+)
14.55 "Наши" (12+)
16.30 "Малахов" (16+)
21.20 Т/с "Зеркало лжи" (16+)
23.20 "Вечер с Владимиром Соловьёвым" (12+)
02.05 Т/с "Тайны следствия" (16+)
03.45 Т/с "Морозова" (16+)

### ОТР

06.00 "Один день из жизни врача" (12+)
06.25 Х/ф "Менялы" (12+)
08.00 Х/ф "Гармонь" (12+)
09.00, 12.55, 19.30 "Календарь" (12+)
09.30, 05.15 "Очень личное с Виктором Лошаком" (12+)
10.10 "Новости Совета Федерации" (12+)
10.30, 11.00, 11.30, 12.00, 15.00, 16.00, 17.00, 20.00 Новости
10.35, 11.05, 11.35, 15.10, 16.05, 20.20 "ОТРажение" (12+)
12.10 "Родительское собрание" (12+)
13.20, 01.20 "Коллеги" (12+)
14.05 "Песня остаётся с человеком" (12+)
14.20 "За дело!" (12+)
17.10 Х/ф "Опасные друзья" (16+)
18.40 М/ф "Мойдодыр" (0+)
19.00 "Вспомнить всё" (12+)
22.00 Х/ф "Петя по дороге в Царствие Небесное" (16+)
23.35 Т/с "Родные люди" (12+)
02.15 "ОТРажение. Главное" (12+)

### БАШҠОРТОСТАН 24

7.00, 7.30, 8.00, 8.30, 10.00, 11.00, 15.30, 16.00, 17.00, 18.00, 20.00, 21.00 Өфө һәм Башҡортостан хәбәрҙәре
7.05, 7.35, 8.05, 8.35, 11.25 Хәйерле иртә, Өфө! /12+/
9.00, 14.30, 17.25, 20.10, 21.25, 0.30, 1.15, 3.00, 6.00 Фильм /12+/
9.25, 14.00, 15.15, 18.50, 0.45, 4.50, 6.35 Өфө моңдары /12+/
9.50, 17.50 Балалар өсөн тапшырыу /6+/
10.20 Иртәнге тапшырыу "Самауыр" /12+/
12.00, 1.45 Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмә. Тура эфир
13.20, 23.00, 2.00 Рәсәй радиоһы /12+/
15.00, 0.10 Сәләмәтлек /12+/
15.45, 1.35 Хәбәрҙәр. Интервью /12+/
16.15, 23.30 Минең Өфөм /12+/
16.45, 0.00 Сәйәхәтсе һуҡмағы /12+/
18.20, 0.00, 5.30 Класс журналы /6+/
19.00 Өфө ваҡыты. Интерактив программа /12+/
6.50 РФ һәм БР гимны /12+/

### БСТ

07.00 "Сәләм"
10.00 Автограф (12+)
10.45 Д/Ф Центр ментального здоровья (12+)
11.00 Новости недели (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Преображение (12+)
12.30 Счастливый час (12+)
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Интервью (12+)
14.00 Бәхетнамә
15.00 Гора новостей (6+)
15.15 "Этно-краса". Дневник республиканского конкурса этнической красоты и таланта "Мисс Содружество" (12+)
15.30 Преград. net (6+)
15.45 Нурбостан сәйәхәте (6+)
16.00 Башҡорттар (6+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Покупаем с Оксаной Масловой (12+)
17.00 Республика LIVE #дома (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.) (12+)
17.45 Интервью (12+)
18.00 Специальный репортаж (12+)
18.15 Остаз (12+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Телецентр (12+)
20.00 Сәңгелдәк (6+)
20.15 Покупаем с Оксаной Масловой (12+)
20.30 Телецентр
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Тайм-аут (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
23.30 Автограф (12+)
00.00 Бәхетнамә (12+)
01.00 Новости (на баш.яз.) (12+)
01.30 К. Гольдони, "Кьоджинские перепалки". Спектакль БГАТД имени М. Гафури (12+)
03.45 Остаз (12+)
04.00 Интервью (12+)
04.15 Телецентр (12+)
05.15 Телецентр (12+)
06.15 Покупаем с Оксаной Масловой (12+)
06.30 Новости (на рус.яз.) (12+)

## ШИШӘМБЕ
31 октябрь

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро" (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00, 03.00 Новости
09.20 "АнтиФейк" (16+)
10.00 "Жить здорово!" (16+)
10.50, 12.15, 17.00, 18.30 "Информационный канал" (16+)
15.15 "Давай поженимся!" (16+)
16.05 "Мужское/Женское" (16+)
19.55 "Куклы наследника Тутти" (16+)
21.00 Время
22.00 Т/с "Бизон: дело манекенщицы" (16+)
23.00 "Большая игра" (16+)
00.00 Подкаст.Лаб "Обман веществ" (16+)
00.45 Подкаст.Лаб "Триггеры" (16+)
01.30 Подкаст.Лаб "Мелодии моей жизни" (16+)
02.15 Подкаст.Лаб "Психика" (16+)
